Бөтә илдәрҙең пролетарийҙары, берләшегеҙ!

ЙӘШЛЕК

1923 йылдан
башлап сыға

ВЛКСМ-дың Башҡортостан Өлкә Комитеты органы

Шәмбе
3
ФЕВРАЛЬ
1990 йыл.
№ 15 (7521).

Хаҡы 3 тин.

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Төп ҡорал — һүҙ
—2-се бит.

ҒӘРИПЛЕК — КҮҢЕЛ ЗӘҒИФЛЕГЕ ТҮГЕЛ

ВӘҒӘҘӘ БИРГӘНҺЕҢ ИКӘН...
—3-сө бит.

Замандаш

Һүҙ — йәш яҙыусыларға
—4—5-се биттәр.

Рәми

«Студент көндәлектәре» (дауамы)

ВАҠЫТ ТҮГЕЛМЕ?
—6-сы бит.

ҠУРАЙ ДӘРЕСЕНӘ РӘХИМ ИТ!
—8-се бит.

Беҙҙең кандидаттар

«ЙӘШТӘР ХОҠУҒЫН ЯҠЛАЯСАҠМЫН...»

Хеҙмәтте яратыу — Тыуған илеңә, халҡыңа ҡарата оло һөйөү бағлау ул,— ти Шишмә РТП-һынан моторҙар ремонтлау цехының мастер-бригадиры Фаил Әнүәр улы Яппаров. Ул йәш булыуына ҡарамаҫтан, тәжрибәле етәкселәрҙән һанала. 1982 йылда Фаилдың инициативаһы буйынса цехта бригада подряды индерелде.

Яппаров — йәмәғәт эшендә лә иң активтарҙың береһе. Өлгөлө хеҙмәте өсөн, ВЛКСМ-дың Үҙәк һәм Өлкә Комитеттарының маҡтау грамоталары менән бүләкләнде.

Һәр кем менән уртаҡ тел таба белә, талапсан, тәүәккәл етәксе, ә иң мөһиме — үҙ эшенең оҫтаһы ул.

Хеҙмәтенә күрә — хөрмәте, тигәндәй, Фаилға иптәштәре ҙур ышаныс күрһәтте: ул 793-сө һанлы Ҡырмыҫҡалы һайлау округынан РСФСР халыҡ депутатлығына кандидат итеп күрһәтелде.

— Ауыл йәштәренең экономик, социаль мәнфәғәттәрен яҡлаясаҡмын,— ти Фаил Яппаров, үҙенең программаһы менән уртаҡлашып. — Һәр хәлдә милли, социаль-политик проблемаларҙы хәл итмәй тороп, ауылдарҙың сәскә атыуына ирешеп булмаясаҡ. Уның һуң экономик хәл дә политикаға бәйле.

СССР халыҡ депутаттарының хоҡуҡтарын яҡлау тураһындағы законды бойомға ашырыу мотлаҡ. Хоҡуҡһыҙ нисек бурыс атҡармаҡ кәрәк? Депутат исемен юғары күтәреү өсөн тырышасаҡмын.

Йәштәр ауылдан китеү яғын ҡарай икән, беренсе нәүбәттә, ауыл хужалығының нигеҙен, тамырынан үҙгәртеп ҡороу мотлаҡ. Хеҙмәтте ойоштороуҙа яңы алымдар кәрәк. Аренда ысулын яйға һалыуҙы һәм арендаторҙарға киң хоҡуҡтар биреүҙе маҡсат итеп ҡуйым.

Бөгөнгө көндә йәштәр араһында енәйәт ҡылыусыларҙың һаны күбәйҙе. Был тайғаҡ юлдан ҡотолоу эшелен милиция хеҙмәткәрҙәре генә түгел, ә бөтә йәмәғәтселек эшләргә тейеш. Шул уҡ ваҡытта дөйөм белем биреү һәм махсус мәктәптәр реформаһын да бойомға ашырырға ваҡыт. Компьютер менән махсус йыһазландырылған мәктәптәрҙе ҡалаларҙа ғына түгел, ә ауылда, эшселәр поселоктарында ла төҙөргә кәрәк.

Күренеүенсә, йәш кандидаттың платформаһы етди һәм көнүҙәк мәсьәләләрҙе үҙ эсенә ала. Фаил Әнүәровичҡа көсөргәнешле һайлау алды бәйгеһендә уңыштар теләйек.

Ф. ӘХМӘТОВА.
Ю. КӘРИМОВ фотоһы.

4 март — Советтарға һайлау көнө

ТӨП ҠОРАЛ—ҺҮҘ

86-сы Баймаҡ милли-территориаль округынан РСФСР халыҡ депутатлығына кандидат, яҙыусы Ғәзим Шафиҡов менән әңгәмә

— **Ғәзим Ғәзизович, илебеҙҙең экономик бөлгөнлөккә төшөүе хәҙер бер кемгә лә сер түгел. Шуға күрә һайлаусылар иң тәүҙә кандидаттарҙың конкрет, материаль ярҙам мөмкинлектәренә ҡарай. Ә яҙыусы ни эшләй ала һуң?**

— Мин һайлау алды кампанияһында тәүге тапҡыр ҡатнашам, шуға күрә был турала ҡапыл ғына әйтеп булмай. Минең уйымса, мәҫәлән, эре бер заводтың директоры конкрет эш, әйтәйек, йорт һала, күпер төҙөй ала һ. б. Уның ҡулында, дәүләттеке булһа ла, аҡса бар. Ләкин был конкрет эш киң масштабтың бер өлөшө генә. Киң масштаблы йәмғиәт программаһын тормошҡа ашырыу өсөн, проблемаларҙы бөтә ҡыйыулығында күтәреп, йәмғиәтте һауыҡтырыу политикаһын үткәрергә, ведомстволарға һәм министерстволарға, хатта идара итеү органдарының иң юғары эшелондарына ҡаршы тора алырлыҡ шәхес булырға тейеш депутатлыҡҡа кандидат булған кеше. Был осраҡта яҙыусының һүҙе мөһимдер, тип уйлайым. Ундай кеше «тыңлаусан күпселек»тең дә ҡыҫымына ҡарамай, хатта яңғыҙы тороп ҡалғанда ла, бирешеп ҡалырға тейеш түгел. Интеллектуаль кимәлдең мөһимлегенә беҙ халыҡ депутаттарының беренсе съезында инандыҡ инде. Быны һайлаусылар аңларға тейеш.

— **Урындағы проблемаларға күсәйек. Мәҫәлән, Баймаҡ районын ғына алғанда, ул — башҡорттарҙың иң күп, тығыҙ йәшәгән районы, унда саф башҡорт теле һаҡланған, таланттар күп, тәбиғәт тә әллә ни үгәйһетелмәгән. Тиҙҙән райондың ер аҫты ҡаҙылма байлыҡтарын үҙләштереү башланасаҡ. Файҙалы ҡаҙылмалар Союз ведомстволарына ҡарағас, етештереүсе көстәр ҙә ситтән буласаҡ һәм, билдәле, генофонд зыян күрәсәк. Һеҙ шул райондан кандидат булараҡ, ни эшләй алаһығыҙ?**

— Үҙәк министерстволар һәм ведомстволар беҙҙең генә түгел, ә илебеҙҙең бөтә төбәктәренең — республикаларының һәм өлкәләренең — дошмандары. Улар беҙҙең урмандарҙы ҡырып, химзаводтар, һыу һаҡлағыстар төҙөйҙәр. еребеҙҙең «елек майын» — нефтен һуралар, ә алмашҡа нимә бирәләр һуң? Әйтергә кәрәк, бай ниғмәттән һығылып торған өҫтәлдән ҡалдыҡ «ризыҡтарын» ғына. Үҙҙәренең нефть һәм химия предприятиелары менән улар урындағы халыҡтың генофондын ғына емереп ҡалманы, һаулыҡтарын ҡаҡшаттылар, уларҙы ҡара эшсе көсөнә әйләндерҙеләр, телдәрен онотторҙолар, мәҙәниәтенән — тарихынан айырҙылар. Был күренешкә ниндәй исем бирергә һуң? Был — ҡырағайлыҡ, эйе, ҡырағайлыҡ. Халыҡтың күҙен буяу аңһат ул. Ә уларға һуҡыр сысҡан кеүек беҙҙең ер аҫтында соҡсонорға кем хоҡуҡ биргән һуң? Ниндәй джунгли колониаль законы буйынса? Иң аяныслыһы — үҙ телен, тарихын, халҡының ғөрөф-ғәҙәтен белмәй үҫеүсе йәштәрҙе күреү. Хәҙер инде һуңлап булһа ла хаталар төҙәтелә, йәштәрҙә үҙ тамырҙарына ҡарата ҡыҙыҡһыныу уянды, төрлө райондарҙа культура үҙәктәре төҙөлә. Уларҙың йәштәргә йоғонтоһо ҙур.

Һеҙҙең төп һорауға ҡатыраҡ та әйттем шикелле. Шулай ҙа тәбиғәтебеҙ бөлгөнлөк кисергән саҡта бөтә тауыштан шуны әйткем килә: үҙ еребеҙгә үҙебеҙ хужа булырға тейешбеҙ.

— **Тағы ла мөһим бер проблема. Йәштәребеҙ тыуған ерен мөрхәтһенмәй, сит өлкәләргә күпләп китә, халыҡ тарала. Миграцияны нисек туҡтатып була?**

— Яҡшы тормош өсөн шарттар тыуҙырып, уларҙы эш менән тәьмин итеп, ялын ойоштороп, тыуған ерендә йәшәү өсөн ҡыҙыҡһыныу уятып... Ә беҙҙә былар юҡ әле. Иң беренсе нәүбәттә — Урал аръяғы райондарында. Беҙҙә әлегә был тәңгәлдә бер ни ҙә эшләнмәй, йәштәр һаман да китә тора. Быны урындағы район етәкселәре генә хәл итә алмай, республика масштабында программа — планлы эш кәрәк. Урал аръяғы райондарының буласаҡ депутаттары быны мөһимлеген аңларға тейеш.

— **Урал аръяғы тураһында һүҙ сыҡҡас, шундай һорау тыуҙы: бына һеҙ социаль үҫеш буйынса артта ҡалған Хәйбулла районында тыуып үҫкәнһегеҙ. Тик кәмһетеп әйтә, тип уйлай күрмәгеҙ. Үҙегеҙҙең округ буйынса РСФСР депутаты булһағыҙ, тыуған районығыҙҙың проблемаларына нисек ҡарар инегеҙ?**

— Дөрөҫ әйтәһегеҙ, Хәйбулла районы республиканың башҡа райондарынан күпкә артта ҡалды. Ләкин район халҡының ғәйебе юҡ бында. Сиҙәм күтәреү осороноң тәүге йылдарында, йәғни район республикаға ҡаты бойҙай биргән саҡта, уға ихтирам да, иғтибар ҙа булды. Шул уҡ сиҙәм политикаһы райондың экономикаһын ҡаҡшатты. Ни өсөн тип уйлайһығыҙ: йыл һайын килгән ҡоролоҡ, тупраҡ эрозияһы һәм башҡа сәбәптәр. Шуға күрә ундағы кешеләр ауылдарҙан күрше өлкәләргә китергә мәжбүр булдылар. «Перспективаһыҙ ауылдар» ер йөҙөнән бөтөнләйгә юғалды. Был хаҡта күп яҙылды, һөйләнде, үҙәк телевидениенан «Онотолған төбәк» тигән тапшырыу ҙа күрһәтелде. Депутат булһам да, булмаһам да һәр ваҡыт мин был районға ярҙам итәсәкмен.

— **Һеҙгә традицион һорау: хәҙер ниндәй әҫәрҙәр өҫтөндә эшләйһегеҙ?**

— Беләһегеҙме, әлегә етди һәм планлы эшләгән юҡ әле. Ғөмүмән, яҙыусы хеҙмәтен планға ҡороп та булмайҙыр. Мәҡәләләр яҙам, тарихты өйрәнәм, ҡайһы саҡ шиғырҙар ҙа тыуа. Ҡайһы бер театрҙарға пьесаларымды ла алып барҙым.

Ҡыҫҡаһы, эш етерлек. Халыҡ араһына күберәк сығырға тырышам. Был бит хәҙерге ваҡытта үҙе ҙур эш.

— **Әңгәмәгеҙ өсөн ҙур рәхмәт, уңыштар теләйем һеҙгә?**

Ә. УТӘБАЕВ
әңгәмәләште.

ИЛ ТЕРӘГЕ БУЛЫРҘАЙ

Һуңғы йылдарҙа Бишбүләк районы йәштәре ауылдан ситкә китә башланы. Әммә тыуған ерендә тамырланған кешеләр ҙә бар.

Рәүеф Бәхтийәров «Дим» совхозының Аҙнай бүлексәһендә эшләй. Тракторсылар курсын тамамлап, үҙенең колхозына ҡайтҡан. Әлеге көндә ул техникаһын киләһе уңыш йыйыуға әҙерләй. Яҙ көнө тракторҙа эшләп, ашлыҡ сәсә, йәйен комбайнға ултыра.

Эшкә яуаплы ҡарағаны өсөн уны ВЛКСМ райкомы район Советына депутатлыҡҡа кандидат итеп күрһәтте. ВЛКСМ райкомы ағзаһы Р. Бәхтийәров йәштәрҙең файҙалы ялы һәм хеҙмәт шарттарын яҡшыртыу, торлаҡ төҙөүҙе тиҙләтеү мәсьәләләре өҫтөндә эшләргә ниәтләй.

Н. ЗАЙЦЕВА.

Бишбүләк районы.

Уландар ҡайтты хеҙмәттән

«Еҙем» лесничествоһы эшсеһе Әмир Сабир улы менән уның тормош иптәше Роза Шәйхелислам ҡыҙының йортона ике шатлыҡ бер юлы килде. Оло улдары Рәмил Төньяҡ хәрби-диңгеҙ флотында өс йыл һыу аҫты кәмәһендә хеҙмәт итеп, ил алдындағы бурысын үтәп, күкрәгендә «Хәрби Диңгеҙ Флоты отличнигы» тигән I һәм II дәрәжәле знактарын балҡытып тыуған еренә ҡайтып төштө. Ата-әсәһе ҡыуанышынан ҡанатланып киткәндәй булды.

Бер-ике көн үткәс, икенсе улдары Венер ҙа сик буйындағы хеҙмәтен тултырып ҡайтты.

...Венер Ж. Киекбаев исемендәге Сәйетбаба урта мәктәбендә уҡығанда уҡ баҫалҡы, тыйнаҡ булыуы, һәр эште еренә еткереп үтәүе менән башҡаларҙан айырылып тора. X класты уңышлы тамамлағандан һуң Красноусольскиҙағы СПТУ-ла уҡып, шофер һөнәрен үҙләштерә. 1987 йылдың ноябрендә Совет Армияһына хеҙмәткә алынып, Төркмән ССР-ында йәш һалдат курсын үтә. Часть командованиеһы һалдаттарҙы сафҡа теҙеп:

— Кем Афғанстанда хеҙмәт итергә теләй, тип һорай.

В. Фәхриев беренселәрҙән булып алға сыға һәм башҡалар ҙа уның өлгөһөнә эйәрә. Ҡыҙыл Байраҡлы Урта Азия округының сик һаҡсылары ғәскәрҙәрендә өлкән прожекторсы булып хеҙмәт итә башлай. СССР Верховный Советы Президиумының 1988 йылдың 28 декабрендәге ҡарары менән «СССР-ҙың Дәүләт сиген һаҡлауҙа күрһәткән батырлығы өсөн» миҙалы менән наградлана. Шул уҡ ваҡытта уға «Яугир-интернационалисҡа Афғанстан халҡынан» миҙалы ла бирелә. Йәш яугир өлгөлө хеҙмәте өсөн тағы бик күп наградаларға, маҡтау һүҙҙәренә һәм ҡиммәтле бүләктәргә лайыҡ була.

Ҡыҫҡаһы, Венер менән Рәмил өсөн ата-әсәһенә ҡыуанып, ғорурланып ҡына йәшәрлек хәҙер. Тик донъялар ғына имен торһон.

Ә. М. ҠАҺАРМАНОВ,
һуғыш һәм хеҙмәт ветерандары советы ағзаһы.
Ғафури районы,
Сәйетбаба ауылы.

Йыл уңышлы башланды

Республикабыҙҙағы нефть ятҡылыҡтарында ер аҫты хазиналарын туплау эше менән хәҙерге ваҡытта 10 нефть һәм газ сығарыу идаралығы шөғөлләнә. «Краснохолмнефть» коллективы — алдынғыларҙың береһе. Ул уҙған йылда, 5 миллион тоннаға яҡын «ҡара алтын» сығарып, нефть күләме буйынса республикабыҙҙа әлеккесә икенсе урынды алды.

«Краснохолмнефть» коллективы 1990 йылды ла ифрат уңышлы башланы. Скважиналарҙы дөрөҫ режимда тотоу, һәр төрлө отошло геология-техник саралар уҙғарыу, операторҙарҙың һәм промыслаларҙа эшләүсе башҡа кешеләрҙең үҙ вазифаларын еренә еткереп башҡарып. был коллектив ғинуар айында башҡа идаралыҡтарға ҡарағанда пландан тыш нефть сығарҙы һәм эшкәртеү заводтарына 10 мең тоннанан ашыу сырье оҙатты.

Р. РӘХМӘТУЛЛИН.

Киң күңелле апай

Ауылыбыҙҙа уңған, изгелекле кешеләр күп. Уларҙың береһе — Зәйнәп Ғәбдрахимова апай. Ауыр йылдарҙа үҫкән ул. 15 йәшендә етем ҡалып, туғандарына берҙән-бер терәк булған. Уҡыуын ташларға тура килә, сөнки ҡустылары бәләкәй — ете һәм дүрт йәштә генә. Улар үҫеп тә етмәй, һуғыш башлана, быуындары нығынып бөтмәгән балалар иңенә ҙур йөк булып төшә. Ҙур ҡыйынлыҡтар аша Зәйнәп апайҙың туғандары үҫеп етеп, тормошта үҙ урынын тапҡан.

Ул үҙе хәҙер өләсәй инде. Ире менән бергә алты бала тәрбиәләп үҫтергәндәр, барыһына ла тейешле белем биргәндәр.

Төрлөһө-төрлө ерҙән ҡунаҡҡа ҡайта. Азат — Ҡалтасы районында, Зилә менән Лиза Өфөлә йәшәй. Кесе ҡыҙҙары Гүзәл Өфө технология институтының дүртенсе курсында уҡый, улдары Фәтих менән Фәнил совхозда эшләй. Зәйнәп апай Фәнил улында йәшәй, ейәндәрен тәрбиәләргә ярҙам итә.



Киң күңелле, кешеләргә алсаҡ булғаны, һәр кемдең шатлығын уртаҡлаша, көйөнгәндә йыуата белгәне өсөн Зәйнәп апайҙы ауылдаштары хөрмәт итә.

Ә. ЛАТИПОВА.

Бүздәк районы,
Урзайбаш ауылы.

Йәштәр мәнфәғәтендә

Элек предприятиеларҙа, колхоз-совхоздарҙа коллектив договорҙар төҙөгәндә йәштәр мәнфәғәтен хәстәрләгән бер генә пункт та индерелмәй торғайны. Һөҙөмтәлә ауылдарҙа, эш шарттары хөрт булған предприятиеларҙа йәштәр нығынмай.

ВЛКСМ-дың Шишмә район комитеты комсомол активы мәктәбен үткәрҙе. Унда йәштәр лидерҙарына, тәүге ойошмаларҙың үҙ иҫәбен асып, предприятие килеменән 0.1—0.5 процентын күсереүгә ирешеү бурысы ҡуйылды.

Хәҙерге ваҡытта тәүге комсомол ойошмаларында коллективтарҙың хеҙмәт советтары тейешле ҡарар ҡабул итһен өсөн актив эш йәйелдерелде. Был йәһәттән «Агропромхимия»ның тәүге ойошмаһы секретары Камил Ноғаев, «Маяҡ» колхозында — Рәфил Насиров, шәкәр заводында Рафаил Ғәбитовтар ҙур тырышлыҡ һала.

Р. НИҒМӘТЙӘНОВ,
ВЛКСМ район комитетының икенсе секретары.
Шишмә районы.

ЗӘҒИФ БАЛАЛАРҘЫ ТӘРБИӘЛӘҮ ҺӘМ УЛАРҘЫҢ СӘЛӘМӘТЛЕГЕН ҺАҠЛАУ ЭШЕНДӘ ХАЛЫҠ МӘҒАРИФЫ КОМИТЕТЫНЫҢ ВАЗИФАЛАРЫН КИЛЕШТЕРЕҮ ТУРАҺЫНДА ХАЛЫҠ КОМИССАРҘАРЫ СОВЕТЫ

ҠАРАРЫ

1. Нервылары һәм психикаһы боҙолған ауырыу балалар Халыҡ сәләмәтлеген һаҡлау комитеты йорттарында (мәктәп-санаторийҙарҙа, дауалау мәктәптәрендә һ. б.) тәрбиәләнә.

2. Аҡылға зәғиф балалар Халыҡ мәғарифы комитетының ярҙамсы мәктәптәрендә тәрбиәләнә.

3. Физик яҡтан зәғиф (һаңғырау, телһеҙ, һуҡыр, ғәрип) балалар Халыҡ Мәғарифы комитетының махсус йорттарында тәрбиәләнә.

4. Мораль яҡтан зәғиф, бәлиғ булмаған балалар Халыҡ мәғарифы комитеты һәм Халыҡ сәләмәтлеген һаҡлау комитеты йорттарында (күҙәтеү, ҡабул итеү — бүлеү пункттарында һ. б.) тәрбиәләнә. Йәмғиәткә ҡурҡыныс янаусы эштәрҙә ғәйепләнеүселәр, бәлиғ булмағандар тураһындағы комиссия билдәләүенсә, Халыҡ мәғарифы комитетының теге йәки был йорттарына ебәрелә.

Халыҡ Комиссарҙары Советы Председателе
В. УЛЬЯНОВ (Ленин).
Халыҡ Комиссарҙары Советының эштәр управляющийы Влад. **БОНЧ-БРУЕВИЧ.**
Халыҡ Комиссарҙары Советы секретары
С. БРИЧКИНА.

Мәскәү, Кремль,
1919 йылдың 3 декабре.

ҒӘРИПЛЕК— КҮҢЕЛ ЗӘҒИФЛЕГЕ ТҮГЕЛ

БЫЛ онотолған, әммә бөгөнгө көнүҙәк проблемаларҙың береһен үҙ эсенә алған документтың ҡабул ителеүенә 70 йылдан ашыу ваҡыт үтте. Октябрь революцияһының таңында уҡ физик йәһәттән һәм аҡыл яғынан артта ҡалған, ауырыу, зәғиф балалар өсөн яңы дәүләт йорттарын асыу, уларҙы бушлай уҡытыу, тәрбиәләү һәм башҡа бик күп мөһим мәсьәләләр ыңғай хәл ителә башлай. Тик ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында был файҙалы эш тотҡарланып ҡала. Бәлки, ундай балалар Советтар илендә юҡ һәм булыуы ла мөмкин түгел, тигәнерәк күңел йыуатҡыс ҡараш быға күҙ йомоп ҡарауға сәбәпсе булғандыр.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был проблема күптән инде йәшәп килә, уға күҙ йомоп ҡарау ҙур әхләҡһеҙлек булыр ине. Бөгөн беҙҙең бәләкәй генә республикабыҙҙа 33 махсус мәктәп-интернат бар. Йыл һайын тиерлек район халыҡ мәғариф бүлектәрендә ҡайһы бер өндәрҙе әйтә белмәгән, тотлоҡҡан, телмәрендә һәм яҙыуында үҙенсәлекле хаталар күп булған балалар өсөн логопед пункттары асыла. Балалар учреждениеларына ебәреү өсөн йыл да медик-педагогик комиссиялар төҙәлә. Ләкин быларҙы булдырыу сәбәптәренә ҡаршы көрәшәбеҙ, тигәнде аңлатмай.

Бының төп асылы бик тәрәндә ята, ул айырым кешенең генә түгел, ә дөйөм социаль проблема булып ҡала. Бөгөнгө көндә балаларҙың зәғиф тыуыуының, уларҙың үҫеш йәһәтенән артта ҡалыуының төп сәбәбе - экология факторҙарына барып тоташыуы бөтәһенә лә билдәле.

Экологик йәһәттән иң бысраҡ Салауат, Стәрлетамаҡ Өфө ҡалаларында бындай балалар һаны йыл һайын артҡандан-арта бара.

Быйыл ғына Черниковкала һәм Салауатта аҡыл йәһәтенән зәғиф балалар өсөн 2 балалар баҡсаһы асылды. Ярҙамсы мәктәптәрҙә һәр класта 16 урынына 21-22 бала уҡый.

Бөтә донъя күләмендәге һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәттәре буйынса, биосферала аҙаҡҡы 25 йыл эсендә туранан-тура кешегә, уның гендар аппаратына тәьҫир итеүсе 4.5 миллион яңы химик матдәләр булыуы асыҡланды. Газеталарҙа: «Иң таҙа һауа — океан өҫтөндә. Ауылдарҙа бысраҡ саң ҡатышлы һауа 10 тапҡырға артығыраҡ, ҙур булмаған ҡалаларҙа һауа 35 тапҡырға бысрағыраҡ, ҙур промышленносҡа эйә булған ҡалалар өҫтөндә аҫылынып тороусы ауыр болот ҡурғаштары составында 150 тапҡырға күберәк», — тип уҡыйбыҙ. Был һандарҙы һыу, аҙыҡ-түлек продукттары, көнкүреш химияһы һәм башҡа нәмәләргә ҡарата ла тағы бик күп килтерергә мөмкин булыр ине. Химик матдәләрҙең кеше организмына зарарлы тәьҫире уғата көслө: ул аҡрынлап шәхестең тарҡалыуына йәки шәхес булараҡ бөтөүенә килтерә. Дефектология фәне лә үҙенең ғилми тикшереүе эшендә бөтә донъя күләмендәге һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы килтергән мәғлүмәттәрҙе раҫланы: бөгөн балаларҙың 8—10 проценты зәғифлеге һәм башҡа кәмселектәре бер ниндәй ҙә ярҙамсыл ысулдар, саралар менән төҙәтә алмаҫлыҡ хәлдә тыуа. Әммә ҡәҙимге, күҙгә ташланып бармаған кәмселектәре булған, уҡыуында теге йәки был сәбәптәр арҡаһында өлгәшә алмаған балалар һаны уға ҡарағанда 2 тапҡырға күберәк. Бөгөн бының ни тиклем ауыр, ҡайһы бер осраҡта бер ниндәй ысулдар менән дә төҙәтә алмаҫлыҡ икәнлеген уҡытыусы яҡшы аңлай. Сөнки ундай балалар ауыл мәктәптәрендә һәр класта тиерлек бар. Хәҙерге йәштәр, ата-әсәләр бындай уҡыусыларҙы дөйөм урта белем биреү мәктәптәрендә кеслап уҡытыуҙары менән үҙ балаларына ни тиклем зыян килтереүҙәрен аңлап етеңкерәмәй. Комиссия, бындай балаларҙы теге йәки был дәүләт йортона ебәрергә, тигән ҡарар сығарһа ла ата-әсәләр: «Уҡымаһа ла ярар, беҙ белемһеҙ булһаҡ та йәшәйбеҙ бит әле», — тигән фекер белдереп, үҙ балаларының киләсәк яҙмышын еңел генә хәл итеп ҡуя. Был балаларҙы махсус мәктәп-интернаттарҙа дефектологтар бөтөнләй икенсе төрлө ысулдар, юлдар менән башҡа нормаль үҫешкән балалар кимәленә еткереп, хәҙерге тормошҡа яраҡлаштырып тәрбиәләй. Улар өсөн икенсе программалар төҙәлә.

Был проблема, ниндәйҙер, кимәлдә, хәҙерге көнгә тиклем йәшәп килгән «тигеҙләштереү» принцибының һөҙөмтәһе лә булып тора.

ҮРҘӘ бирелгән Ҡарарҙың икенсе пунктына күҙ һалайыҡ: «Аҡылға зәғиф балалар Халыҡ мәғарифы комитетының ярҙамсы мәктәптәрендә тәрбиәләнә», — тиелгән. Әйтергә кәрәк, «аҡылға зәғиф бала» йәки халыҡ телендәге «аҡылға камил түгел», — «бер төрлө», «иҫәр», «йүләр», «алйот» тигән төшөнсәләр, бер ниндәй ҙә төҙәтмәләр индерелмәйенсә, бына 70 йылдан ашыу инде халыҡты ҡурҡытып килә. Дефектология фәне был терминды бөтөнләй аңлау кәүәһе булмаған балаларға ҡарата ғына ҡуллана. Шуға ла ярҙамсы мәктәптәрҙә, йәғни халыҡтың һөйләү телендәгесә «иҫәрҙәр» мәктәбендә теоретик йәһәттән үтә ҡатмарлы программаһын иҫәпһеҙ-һанһыҙ сәбәптәр арҡаһында үҙләштерә алмаған, ауыр холоҡло, тормошҡа яраҡлашмаған балалар уҡый.

Был терминды дөрөҫ ҡулланмау менән беҙ белемебеҙҙең һай булыуын, балаларҙы аңламауыбыҙҙы күрһәтәбеҙ. Икенсе яҡтан, ул терминды дөрөҫ ҡулланмауҙың һөҙөмтәһе үтә борсоулы: мәктәптән һуң кеше яҙмышын кире хәл итеүҙә лә ҙур роль уйнауы ихтимал.

Йәштәрҙең, ата-әсәләрҙең махсус мәктәптәрҙә уҡытырға тейеш булып та уҡытмаған балаларын унда ебәрмәйенсә өйҙә тотоуҙарының йәки һаман дөйөм белем биреү мәктәптәрендә уҡытыуҙы дауам иттереүҙәре һөҙөмтәһендә бындай «зәғиф» бала үҙен тиҫтерҙәренән кәм итеп тоя, башҡаларға ниндәйҙер яғы менән оҡшамауын ауыр кисерә һәм үҙ-үҙенә бикләнеп, йәғни айырым автономияла йәшәргә мәжбүр була. Бындай «изолятор»ҙа бала артабан тейешле кимәлдә үҫешә алмай һәм күп осраҡта олоғайғас та аҡылы бала кимәлендә ҡала.

Белем кимәлебеҙ түбән булыу сәбәпле, химия предприятиелары сығарған зарарлы ҡалдыҡтарға, уларҙың тәбиғәтте бысратыуына, кеше сәләмәтлегенә, уның үҫешенә зыян килтереүенә ҡаршы тейешле саралар күреп көрәшә алмайбыҙ. Әле бер нисә йыл элек кенә «экология», «тирә-яҡ мөхиттең бысраныуы», «экологик кризис» кеүек терминдарҙы ғалимдар ауыҙынан ғына ишетһәк, бөгөн килеп үҙебеҙ үк урмандарҙың һәм йылғаларҙың ҡороуына, ҡайһы бер төр хайуандарҙың бөтөүенә, йылға һәм күлдәрҙең ағыуланыуына, ә иң ҡурҡынысы — зәғиф балаларҙың йылдан-йыл күберәк тыуыуына шаһит булдыҡ.

Шуны ла өҫтәп әйтергә кәрәк: һәр бер халыҡ йәки йәмғиәт иң элек ололарға, балаларға һәм тәбиғәткә мөнәсәбәте ниндәй булыуына ҡарап билдәләнә. Әгәр ҙә ауырыу балалары булған һәр ғаилә: «Нимә ул бәхет?» — тигән һорауға: «Бәхет ул — сәләмәт, һау, таҙа балаң булыуҙа», — тип яуап бирһә, әгәр ҙә мәктәптә матур, юғары идеялы һүҙҙәр ятлаған тәрбиәләнеүсең, дәрестән сығыу менән, тирә-яҡ мөхиткә зыян килтерһә — былар барыһы ла кешелектең шәфҡәтле, мәрхәмәтле булыуын һорау аҫтына ҡуя.

Тик бөгөн бер ғаиләнең дә был проблеманан ситтә, язаһыҙ ҡалыуына ышаныс юҡ. Һәр кешегә, һәр йән эйәһенә экологик һәләкәт янай.

Р. АСЛАЕВА,
Башҡортостан уҡытыусылар белемен камиллаштырыу институты методисы.

Вәғәҙә биргәнһең икән...

Үткән йыл Борайҙа «Баштрикотажбытурал» берекмәһе Бөрө фабрикаһының филиалы асылған. Уға «Айгөл» исеме биргәндәр.

Трикотаж костюмдар тегеү, колготкалар бәйләү өсөн цех ойоштороу зарурлығын Халыҡтың көнкүреш хеҙмәтләндереү министерствоһының район производство идаралығында күптән аңлағандар һәм РПУ начальнигы А. Ф. Мөхәмәтйәнов Раушания Фәттәховаға салон ойоштороrға тәҡдим итә. Раушания тормош иптәше Азат һәм тегенсе Зилә Шәйхиева менән 1988 йылдың көҙөндә ике ҡатлы бинаны йүнәтеп, буяп алалар. «Энергетик» кооперативы ҡорамалдарҙы монтажларға ярҙам итә. Октябрь айында Р. Фәттәхова Бөрөлә, филиал мөдире булараҡ, курста уҡып ҡайтҡандан һуң 28 кешенән төркөм төҙөп, уҡыу ойошторалар, сөнки салон мөдире менән технолог Фәриҙә Баҡыеванан башҡа трикотаж бәйләү эшен белгән кеше булмай. Тәүҙә ҡыйынға төшә, әлбиттә, әммә аҡрынлап оҫталыҡ туплай башлағандар.

— Сентябрҙән алып план менән эшләй башланыҡ, — ти механик Азат Фәттәхов. Ул хәҙер ҡатыны урынына мөдир вазифаһын башҡара, ә Раушания бала тәрбиәләү отпускыһына сыҡҡан икән.

2600 һумлыҡ тауар һатыу бурысы ҡуйылған коллектив алдына. Заданиены үтәгәндәр. Ә быйыл ғинуарҙа 4000 һумлыҡ трикотаж эшләү бурысы йөкмәтелгән.

— Ҡыҙҙар эшкә өйрәнде инде, ай һайын күрһәткестәр яҡшыра килә, 20—30 һумға булһа ла, планды арттырып үтәйбеҙ, — ти Азат.

«Айгөл» салоны өлкәндәр һәм балалар өсөн жакеттар, пуловерҙар, спорт башлыҡтары, колготкалар, бәләкәй ҡыҙҙарға косынкалар бәйләй, трикотаж туҡымаларҙан ҡупшы күлдәктәр, махсус материалдан спорт костюмдары тегә. Продукцияһын халыҡ яратып та өлгөргән.

Кешеләр етешмәү сәбәпле, коллектив тулы көсөнә эшләй алмай. Сырье табыуҙа ла тотҡарлыҡтар йыш осрай.

— Сырье артынан үҙең йөрөмәһәң, һүнлеһе әләкмәй, — ти А. Фәттәхов. — Машина юҡлығы ныҡ ҡамасаулай. Рейс автобусы менән генә эш ҡыйрата алмайһың.

Заманса станоктар ҙа етмәй икән. Башлыҡтар һәм колготкалар бәйләү өсөн «Симак» исемле япон машинаһы кәрәк. Әле ҡул машинаһы менән генә эшләйҙәр. «Баштрикотажбытурал» тәүҙәрәк вәғәҙә иткән булған, ә хәҙер өндәшмәйҙәр ҙә икән.

Трикотаж филиалында хеҙмәткәрҙәрҙең 70 проценты 30-ға етмәгән йәш ҡыҙҙар. 12 кеше иҫәптә торған комсомол ойошмаһына тегеү цехында эшләүсе Линария Балаева етәкселек итә.

— Тәжрибә кимәлдәре тигеҙ булғанға, мин кемделер айырып күрһәтә алмайым. Бөтәһе лә һәйбәт эшләй, — ти Азат.

Йәш коллектив һынау осорон үтеп эш күрһәткән дә инде: салонға заказ менән Борай районынан ғына түгел, Балтачтан, Мишкәнән дә килә башлағандар. Ойошмалар ҙа мөрәжәғәт итә, мәҫәлән, Чапаев исемендәге колхоз 46 спорт костюмы, «Родина» колхозы мәктәп өсөн —15, Борайҙағы балалар-үҫмерҙәр спорт мәктәбе һәм «Урожай» спорт йәмғиәте 150-гә яҡын башлыҡ бәйләтеп алған. Тимәк, «Айгөл» салонына эшһеҙ ултырыу ҡурҡынысы янамай.

Г. РИЗУАНОВА.
Борай районы.

Ышаныс менән

Төҙөүселәр алдына илебеҙ быуат аҙағына бөтә кешене лә фатирлы итеү бурысын ҡуйҙы. Бойомға ашырмы был хыял? Әлегә аныҡ ҡына әйтеүе ҡыйын.

Учалы ҡалаһында ла фатир мәсьәләһе ҡырҡыу тора. Әммә «Учалыстрой» тресына ҡараған төҙәлеш бригадаларында егәрле йәштәрҙең булыуы киләсәккә ышаныс уята. Урал Сафин етәкләгән бригадала, мәҫәлән, крансы Илсур Баймораттовты маҡтап телгә алалар. Ҡыҫҡа ғына ваҡытта үҙ һөнәрен бик һәйбәт үҙләштереп алған ул.

ҺҮРӘТТӘ: крансы Илсур Байморатов.

А. БИЛАЛОВ фотоһы.

Тамара ИСКӘНДӘРОВА

Урман

Ҡулға алдым имән япрағын,
Ҡулға алдым ҡайын япрағын,
Ҡулға алдым йүкә япрағын,
Текләнем дә алыҫ урманға,
Таптым күптән көткән уйымды.
Һиҙмәнем мин ҡойма ямғырҙы,
Шул уй мине өттө, яндырҙы,
Тамам еңде мине, инандырҙы —
Бар зиһенем уға буйһондо.
Сәскә түгел һәм түгел орлоҡ,
Ябай япраҡ — ниндәй тоғролоҡ!
Көнләшептәр хатта торорлоҡ:
Ул ағастан алған буй-һынды.
Һиҫкәнеп мин ҡапыл ҡалҡындым:
Тоймаҫ инем мин дә һалҡынды,
Һаҡлай алһам һынын халҡымдың,
Һәр япраҡтай, һөйөп ул һынды!
Таптым күптән көткән уйымды,
Бар зиһенем уға буйһондо:
Ағасына япраҡ оҡшаған,
Ағасынан алған буй-һынды.
Ҡандырғандай был уй һыуһынды...

Юныс ЗӨБӘЙЕРОВ

Диңгеҙ нимә?!

Диңгеҙ менән минең йәнде сағыштырма.
Дөрөҫ: диңгеҙ дауыллана, диңгеҙ шаулай.
Кәмәләрҙе юныҫҡылай бәреп йөрөтә,
Тулҡындары була уның бейек тауҙай.

Дөрөҫ: диңгеҙ тыныс була, була матур.
Кем һоҡланмаҫ ҡарап диңгеҙ киңлегенә?
Тулҡындарҙың мәңгелеккә тынмаҫ йыры
Ғашиҡ итмәҫ ғүмерлеккә кемде генә?

Юҡ! Минең йән барыбер ҙә дәһшәтлерәк.
Ул үҙенең көсөн һиҙә: төпһеҙ, сикһеҙ!
Ниндәй сер бар, ҡаршылыҡ бар еңәлмәҫлек?
Ҡайҙа серле йоҙаҡтар бар, улар — бикһеҙ.

Һин бер ҡатлым, хәйләһеҙем, минең йәнем.
Мөхәббәтле һинең тәрән күңел күҙең.
Сабый бала телəгеләй, саф бит был йән!
Саф сағында бер ни еңмәҫ уның үҙен.

Диңгеҙ менән сағыштырма минең йәнде.
Диңгеҙҙәрҙең һәр яғында була ярҙар.
Сал тулҡындар бәрә унда көнө-төнө,
Минең ярһыҙ хистәремдән көсһөҙ улар.

Мөхәббәт һәм үлемһеҙлек бар йәнемдә.
Һыйған уға ҡояш үҙе, үҙе йыһан!
Диңгеҙ нимә? Тулҡын нимә? Ҡеүәтлерәк
Сағыштырма, мин — көслөрәк, көслө был йән!

Яҙыусыларҙың партия йыйылышы

«Яҙыусы-коммунистарҙың Стәрлетамаҡ яҙыусылар ойошмаһы эшмәкәрлегенә булышлығы» — Башҡортостан Яҙыусылар союзы партия ойошмаһының 18 ғинуарҙа уҙғарылған йыйылышы ошо темаға арналды.

Башҡортостандың көньяҡ регионында йәшәүсе әҙиптәрҙе берләштереүсе Стәрлетамаҡ яҙыусылар ойошмаһы төҙөлөүгә биш йыл ваҡыт үтте. Ошо осорҙа ниҙәр эшләнгән, ойошманың мохтаҡлыҡтары һәм уңыштары ниҙән ғибарәт? Стәрлетамаҡҡа ойошма ағзалары менән осрашыуға барған Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы председателе Динис Бүләков, уның урынбаҫары Нәҙим Аралбаев, идара секретары Аҫылғужа Баһуманов, партбюро секретары Булат Рафиҡовтарҙы ошо мәсьәлә ҡыҙыҡһындырҙы.

— Стәрлетамаҡ яҙыусылар ойошмаһы асылда төбәктә мәҙәниәт менән шөғөлләнеүсе абруйлы көс булып танылды, — тип белдерҙе Булат Рафиҡов партия йыйылышында. — Бында мәктәптәр, китапханалар, китап сауҙаһы, балалар баҡсалары менән берлектә тыуған телде уҡытыу, әҙәбиәтте пропагандалау, экологияны яҡлау эше ярайһы уҡ уңышлы алып барыла. Йыл әйләнәһендә дүрт тапҡыр әҙәби байрамдар уҙғарыла.

Бөгөнгә көндә был төбәктә ун СССР Яҙыусылар союзы ағзаһы йәшәй һәм ижад итә. Үкенескә ҡаршы, биш йыл эсендә ни бары дүрт кенә кеше Союзға ағза итеп алынған. Тиҫтәгә яҡын, өлгөрөп еткән яҙыусы, бер йәки бер нисә китап авторҙары булыуға ҡарамаҫтан, иғтибарҙан ситтә ҡала килә. Эльмира Сәсәнбаева, Зөбәржәт Йәнбирҙина, Рәлиф Кинйәбаев, Салауат Рәхмәтуллин, Мөслим Әбсәләмов һәм башҡаларҙың исеме әҙәбиәт һөйөүселәргә күптән таныш. Йыйылыш СССР Яҙыусылар союзы ағзалығына ҡабул итеү комиссияһының бер ултырышын ошо ойошма ағзаларын ҡабул итеүгә арнарға мөмкин булыр ине, тигән ҡарарға килде.

Башҡортостандың көньяғындағы эре ҡалаларҙа һәм тиҫтәләгән райондарҙа йәшәүселәр өсөн башҡорт телендә газета сығарылмай. Ойошма үҙе лә матбуғат органына мохтаж. Республика матбуғаты һәм Башҡортостан китап нәшриәте был яҡта йәшәгән әҙиптәргә һалҡын ҡарай. Ҡулъяҙмалар оҙаҡ йылдар планға индерелмәй.

Динис Бүләков яҙыусыларҙың социаль хәле, көнкүреше ауырлығына туҡталды. Ветеран яҙыусы Фәйзи Ғүмәров, Әхмәт Әһлиуллин һәм башҡалар торлаҡ мохтажлығы кисерә. СССР Әҙәби фондының Башҡортостан бүлексәһе директоры Александр Филипповҡа хәлде ныҡлы өйрәнеп, ярҙам күрһәтеү бурысы йөкмәтелде.

Партия йыйылышында сығыш яһаусылар ойошманың статусын һәм абруйын күтәреүҙә тәүге партия ойошмаһын булдырыу ярҙам итер ине, тигән һығымта яһаны.

Стәрлетамаҡта Башҡортостан Яҙыусылар союзы бүлексәһен асҡанда икеләнеүле фекерҙәр ҙә булғайны. Әммә тормош бөгөн уның эшмәкәрлегенең маҡсатҡа ярашлы булыуын раҫланы. Ошондай уҡ бүлексәне Сибай ҡалаһында асыу ҙа өлгөрөп еткән мәсьәлә.

Йыйылышта Булат Рафиҡов, Динис Бүләков, Рәшит Солтангәрәев, Марсель Ғафуров, Йыһат Солтанов, Әсхәл Әхмәтҡужин, Рәмил Хәкимов, Тайфур Сәғитов, Әхмәт Әһлиуллин, Мөхәммәт Хәйҙәровтар сығыш яһаны.

Башҡортостан яҙыусыларының партия йыйылышы Стәрлетамаҡ яҙыусылар ойошмаһы эшмәкәрлеген ҡәнәғәтләнерлек тип тапты һәм конкрет ярҙам, берлектәге программа нигеҙендә уны тағы ла йәнләндереү юлдарын эҙләү бурысын ҡуйҙы.

Т. ФӘИЕЗОВА.

ТОЙҒОҺОҘ АҠЫЛ ЙӘКИ АҠЫЛҺЫҘ ТОЙҒО

«Аҡыл менән тойғо йәнәш кенә йәшәй. Аҡыл, тойғонан илһам алып, үҙен үҫтерә. Ләкин үҙенә ҡурҡыныс янағанда, тойғоно үлемгә этәрә...» Был һүҙҙәр йәш әҙип, бығаса шағир булараҡ танылыу алған, бөгөн иһә прозала тәүге аҙымдарын яһаған Әхмәр Үтәбаевтың «Һағыныу» исемле фантастик повесынан алынды. Хәтерегеҙҙә булһа, 1989 йылда «Ағиҙел» журналының 12-се һанында донъя күргәйне.

Тормошта, дөйөм алғанда, тик аҡыл йәки тик тойғолар менән йәшәгән кеше, әлбиттә, юҡ. Нисек кенә булһа ла, ниндәй генә хәл-ваҡиғаларға осраһа ла, кәрәк ҡарарҙы ҡабул итер өсөн әҙәм балаһы аҡылын да, тойғоларын да эшкә егергә мәжбүр. Шул уҡ ваҡытта математиканан ниндәйҙер мәсьәләне сисеү тик логиканы талап итә, тип шартлы рәүештә алырға мөмкин. Был осраҡта кеше аҡыл менән генә файҙалана. Ә нинде шиғыр йәки йыр ижад итеүҙә, башлыса, тойғолар, образлы фекерләү, хистәр өҫтөнлөк итә. Шуға күрә ижадты, тойғо ярҙамында ҡарар ҡабул итеү, тип шартлы рәүештә иҫәпләп була. Тимәк, кешене ниндәйҙер бер объект рәүешендә күҙ алдына килтергәндә, унда ошо ҡапма-ҡаршылыҡ йәшәй һәм көрәшә тип фараз ҡылыу ғәмәлгә ярашлы. Ошо көрәш объекттың үҙен нисек тотоуының нигеҙендә ята ла инде. Әммә тойғо менән аҡыл һәр ваҡытта ла бер-береһенә ҡапма-ҡаршы тип әйтеү ҙә дөрөҫ булмаҫ. Уларҙың бер үк йүнәлешкә, бер үк маҡсатҡа әйҙәүе лә мөмкин бит. Тимәк, кеше — ошо ике фәлсәфәүи категорияларҙың ҡатмарлы синтезы, уны аҡылдан йәки тойғонан башҡа шәхес итеп күҙ алдына килтереү мөмкин түгел.

Әхмәр Үтәбаевтың повесында иһә беҙ бөгөнгә көндөң хәл-ваҡиғаларын ҡабартып һүрәтләгән килеш күрәбеҙ. Автор фантастик әҫәрендә «тойғоһоҙ» аҡылдың һәм «аҡылһыҙ» тойғоноң шәхестә айырым-айырым йәшәүен күрһәткән. Уларҙың үҙ-ара бәйләнешен тасуирлап, ғүмер драмаһын, уның киҫкен ҡоролоштарын ҡәҙимгесә асып биреү урынына бөтөнләй яңы юл һайланған. Бындай саҡта ваҡиғаларҙы һүрәтләү ниндәйҙер өҫтәмә кәртәләрҙе үтеүҙе талап итә, әлбиттә. Әйтәйек, Аҡыл планетаһының тормошон асҡанда персонаждарҙың тик аҡыл менән генә эш итеүен күрһәтеү ҙур оҫталыҡ һәм көс талап итә. Был мәсьәләне ул уңышлы хәл иткән һәм ваҡиғалар ағышы уҡыусыны ышандыра. «Аҡыллы» кешеләрҙең матурлыҡҡа, күңелдең иң юғары хистәренә ынтылышы ла сәйер түгел. Шул уҡ ваҡытта саф аҡылға уның ҡапма-ҡаршылығы — «аҡылһыҙ» тойғоно табып алыуы ауыр. Әммә автор был һынауҙы ла уңышлы үткән — Аҡыл пла-
нетаһын тетрәтерлек, тет
каның һуңғы һүҙе бу
эшләнгән ҡоролмаларҙы
дырырлыҡ көс итеп Са
батыр тарафынан б
рылған башҡорт халы
рын һайлап алған.
моң аша тыуған хисте
дә изгерәк, меха
тойғоно был осраҡта
алдына килтереүе лә
Планетала хөкөм
асыҡ һәм йырға һал
хис көрәше тәбиғи
итеlә һәм һис шикһе
фажиғәгә этәрә. Инте
туаль хеҙмәттең, ҡай
егеттәре — роботтар,
һы бер ҡоролмалар
була. Әммә тойғоһоҙ
дың был ваҡытта яуа
акцияһы ла сәйер:
зация үҙенә тамам
ныс янай башлағас
планетаны һәләкәттән
ҡарырға керешә. Ш
ваҡытта Саян батырҙ
ме лә ошо коллизия



МӨХӘББӘТ ҺӘМ ХЫЯНАТ

Фәрүәз СӘЙФУЛЛИН Ишембай районы Этҡол ауылында 1949 йылда тыуған. Урта мәктәпте тамамлағас, «Ҡыҙыл Урал» колхозында эшләй. 1967—72 йылдарҙа Башҡорт дәүләт университетында уҡый. Унан һуң Мәләүез, Ишембай, Ғафури районы мәктәптәрендә, Стәрлетамаҡ педагогия институтында уҡыта. 1982—85 йылдарҙа В. И. Ленин исемендәге Мәскәү дәүләт педагогия институты аспирантураһында уҡый. Педагогия фәндәре кандидаты. Әлеге көндә ул — Башҡортостан уҡытыусыларының белемен камиллаштырыу институтында өлкән уҡытыусы.

Фәрүәз Сәйфуллин мәктәптә уҡыған йылдарында уҡ шиғыр яҙа, аҙаҡ «Шоңҡар» әҙәби түңәрәгендә шөғөлләнә. Әҫәрҙәре ваҡытлы матбуғатта донъя күргәне бар.

Иламасы, ҡыҙым!

Мин ҡыҙымды бөгөн төштә күрҙем,
Илап тора ине Гөлназым.
Иламасы, ҡыҙым, иламасы,
Иламасы, минең гөл наҙым.

Күҙ йәштәрең миңә хәтерләтә
Ярҙарынан аҡҡан йылғаны.
Шул йылғаны ярға ҡайтарырлыҡ
Көс-ғәйрәтем минең булһамы...

Хыянатты быуып йоҙроғомда
Быраҡтырыр инем йылғаға,
Берәп ҡуйыр инем йылға юлын
Ер шарынан төпһөҙ йыһанға!

Ул сағында артып сыҡмаҫ ине
Һыуҙары ла йылға ярынан.
Күҙ йәшенә сумып,
стем бала
Иламаҫ та ине ҡайғынан.

* * *

Мөхәббәт һәм хыянат —
Оҗмах менән тамуҡ.
Бер күҙеңдән һөйөү,
Береһенән ағыу
Торған икән тамып.
Йыланмы һин мөхәббәт?
Тешеңде ҡуйғанда,
Йөрәккә туралап
Ҡойроғоң бүтәндең
Ботона урала.

Яҡтырыу

Миңә донъя һүнгән кеүек,
Миңә донъя ҡараңғы.
Ҡараңғыла яҡты эҙләп,
Күҙҙәреңә ҡараным.

Ҡараңғыла ҡараштарың
Күңелемде аҡтарҙы.
Шул минутта бөтә донъя
Ап-аҡ булды — яҡтырҙы.

Ап-аҡ ҡына сәскәләргә
Күмелде ана болон.
Ҡара болот баш осонан
Уҙып китте аҡ булып.

Ҡаңғылдашып ике аҡҡош
Килеп төштө Аҡкүлгә.

Аҡ ҡайындар ҡабаланып,
Туй күлдәктәрен кейә.

Ап-аҡ ҡына тараҡ менән
Сәстәреңде тарайһың.
Яҡтырһа ла, яҡты эҙләп
Күҙҙәреңә ҡарайым.

Ҡарама

Көн ҡыҫҡарҙы. Төн оҙайҙы.
Оҙон төндә ятам:
Ҡараңғыла шиғыр яҙыу
Еңел һиңә ҡарата.

Ҡараңғыла ҡарамаға
Ҡарай-ҡарай илайым.
Күҙ йәштәремә күмелеп,
Үткәнемде уйлайым.

Танышҡанда, ҡауышҡанда
Һин ап-аҡ ҡайын инең.
Аппаҡҡайым — бына бөгөн
Ҡап-ҡара ҡайғым минең.

Ап-аҡ ҡына туй күлдәгең
Ниҙән туҡылған икән?
Ап-аҡ ҡайын тип уйлаһам,
Ҡарама булған икән.

Ҡараманың ботаҡтары
Тарбаҡлап китә икән.
Сағанды ла, имәнде лә
Ҡосаҡлап үҫә икән.

Ярыҡ ялғаш

Башымдағы уйҙар,
Маңлайҙағы йыҙҙар,
Йөрәгемдән сыҡҡан
Иң һағышлы йырҙар —

Күҙҙәремдән ике
Яҡҡа аҡҡан йылға.
Башымдағы уйҙан
Сәстәр ағарҙылар.

Ярыҡ ялғашыма
Ҡарап уйлайым.
Ике йылға аға...
Илайым, илайым.

Һөйөү — ярыҡ ялғаш
Минең менән һинең.
Һыуҙа тыпырсына
Ике балам минең.

Буямасы әле күҙҙәреңде

Буямасы әле күҙҙәреңде,
Былай ҙа бит матур күҙҙәрең.
Ҡайғы төҫө — ҡара,
Ҡарашыңды
«Һә» тигәнсе ҡуя үҙгәртеп.
...Аҡ күлдәктән инең.
Аҡ ишекте
Туҡылдатҡас, астың аптырап.
Нисәмә йыл йәшәп күргәнем юҡ
Яҡтылыҡты бынан яҡтыраҡ!
Күҙ нурҙарың, ай нурҙарын уҙып,
Ашанылар төндөң ҡараһын.
Элә булып, күкрәгемә үтеп
Ямаһылар йөрәк яраһын.

Буямасы әле күҙҙәреңде,
Былай ҙа бит матур күҙҙәрең.
Ап-аҡ булһын өйҙөң ишектәре,
Ап-аҡ булһын һинең йөҙҙәрең.

* * *

Толомоңдо таң елдәре түгел,
Толомоңдо тыным тарата.
Һуңғы көстө йыйып бышылдайым:
«Мин яратам һине, яратам!»

* * *

Күҙҙе йомһам, һин эргәлә генә,
Күҙҙе асһам, уға ҡасаһың.
Күҙҙе йомғанда ла, асҡанда ла
Бергә булыр ваҡыт ҡасан һуң?

* * *

Мөхәббәттең яҡтылығы булып
Күҙҙәреңә әгәр күсмәһәм,
Ҡәберемдә серей ятыр инем,
«Һөйөү» тигән дарыу эсмәһәм.

Мөхәббәт һәм кәкүк

Утыҙ минут—утыҙ мең ут
Мөхәббәт усағында.

Фәрүәз СӘЙФУЛЛИН

Утыҙ минут тороп
Һин минең ҡосағым
Өнһеҙ ҡалып һин
тыңла
Йөрәгем һөйләшеүе
Үҙ-үҙемдең бәхетем
Йәшермәй көнләше
Яңғыҙ ҡайын ағас
Кәкүк килеп ултыр
Ултырҙы ла:
«Мин кәкүк!» —
Утыҙ тапҡыр ҡыҫҡ
Кәкүк шулай өҙгәл
Яңғыҙаҡ булғаны
Утыҙ тапҡыр
бышылда
«Һөйөм», тип ҡолағ

Әгәр килһәң

Ҡотһоҙ донъя ә
котлаһыр
Һөйөү килһә әгәр я
Уны күреп,
үлем түшәгем
Күтәрелер инем ай
Күҙҙәренә ҡарап
мөхәббәт
Тик ултырыр инем
көн бу
Көтә-көтә уны,
һағыныу
Булдым инде һары
томбойо
Һөйөү булып яндарым
килһә
Үбер инем һине т
Мөхәббәткә булған
зарығыу
Әжәл хатта үҙе тыя

ТОЙҒОҺОҘ АҠЫЛ ЙӘКИ АҠЫЛҺЫҘ ТОЙҒО

бер объект рәүешендә күҙ алдына килтергәндә, унда ошо ҡапма-ҡаршылыҡ йәшәй һәм көрәшә тип фараз ҡылыу ғәмәлгә ярашлы. Ошо көрәш объекттың үҙен нисек тотоуының нигеҙендә ята ла инде. Әммә тойғо менән аҡыл һәр ваҡытта ла бер-береһенә ҡапма-ҡаршы тип әйтеү ҙә дөрөҫ булмаҫ. Уларҙың бер үк йүнәлешкә, бер үк маҡсатҡа әйҙәүе лә мөмкин бит. Тимәк, кеше — ошо ике фәлсәфәүи категорияларҙың ҡатмарлы синтеҙы, уны аҡылдан йәки тойғонан башҡа шәхес итеп күҙ алдына килтереү мөмкин түгел.

Әхмәр Үтәбаевтың повесында иһә беҙ бөгөнгө көндөң хәл-ваҡиғаларын ҡабартып һүрәтләгән килеш күрәбеҙ. Автор фантастик әҫәрендә «тойғоһоҙ» аҡылдың һәм «аҡылһыҙ» тойғоноң шәхестә айырым-айырым йәшәүен күрһәткән. Уларҙың үҙ-ара бәйләнешен тасуирлап, ғүмер драмаһын, уның киҫкен ҡоролоштарын ҡәҙимгесә асып биреү урынына бөтөнләй яңы юл һайланған. Бындай саҡта ваҡиғаларҙы һүрәтләү ниндәйҙер өҫтәмә кәртәләрҙе үтеүҙе талап итә, әлбиттә. Әйтәйек, Аҡыл планетаһының тормошон асҡанда персонаждарҙың тик аҡыл менән генә эш итеүен күрһәтеү ҙур оҫталыҡ һәм көс талап итә. Был мәсьәләне ул уңышлы хәл иткән һәм ваҡиғалар ағышы уҡыусыны ышандыра. «Аҡыллы» кешеләрҙең матурлыҡҡа, күңелдең иң юғары хистәренә ынтылышы ла сәйер түгел. Шул уҡ ваҡытта саф аҡылға уның ҡапма-ҡаршылығы — «аҡылһыҙ» тойғоно табып алыуы ауыр. Әммә автор был һынауҙы ла уңышлы үткән — Аҡыл планетаһын тетрәтерлек, техниканың һуңғы һүҙе буйынса эшләнгән ҡоролмаларҙы яндырырлыҡ көс итеп Саян батыр тарафынан башҡарылған башҡорт халыҡ йырын һайлап алған. Ошо моң аша тыуған хистәрҙән дә изгерәк, мөҡәддәсерәк тойғоно был осраҡта күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын. Планетала хөкөм һөргән асыҡ һәм йырға һалынған хис көрәше тәбиғи ҡабул ителә һәм һис шикһеҙ ҙур фажиғәгә этәрә. Интеллектуаль хеҙмәттең ҡайһы бер егеттәре — роботтар, ҡайһы бер ҡоролмалар һәләк була. Әммә тойғоһоҙ аҡылдың был ваҡытта яуап реакцияһы ла сәйер: цивилизация үҙенә тамам ҡурҡыныс янай башлағас ҡына планетаны һәләкәттән ҡотҡарырға керешә. Шул уҡ ваҡытта Саян батырҙың үлеме лә ошо коллизияға трагик аһәң өҫтәй. Эйе, тик тойғоһоҙ аҡылға ғына хас булған, тик ул ғына башҡара алған эш был.

Хәл-ваҡиғаларҙың бөтә планета кимәлендә хәл ителеүе әҫәргә ниндәйҙер глобаль һыҙаттар, киң ҡоласлылыҡ өҫтәй. Ирекһеҙҙән, күҙ алдына Ер — кешелектең кескәй генә сәңгелдәге, беҙҙең тормош килеп баҫа. Ошо көнгә тиклем эшләнгән хаталар, уларҙың бер-береһенә ҡатмарлы сейәләнеше, илебеҙҙәге барған милләтара мөнәсәбәттәр, бер төймәгә генә баҫҡанда һәләкәткә дусар ителергә торған, атом бомбаһында ултырған кешелек, глобаль экологик кризис янаған Ер... Был мәсьәләләрҙең береһен дә тик тойғолар йәки тик аҡыл менән генә хәл итеп булмай, уларҙы сисеү өсөн аҡыл да, тойғо ла — уларҙың синтеҙы, мораль-этик һығымтаһы кәрәк.

Повестың фольклор, риүәйәттәр нигеҙендә яҙылыуы, ваҡиғалар ағышының шахмат уйыны кеүек символик образдар менән үрелеп алып барылыуы, милли ерлектең асыҡ күренеүе уны уҡымлы итә. Шуның өсөн дә әҫәрҙең тәьҫир көсө бар.

Рафиҡ ҠУНАҠБАЕВ.

Ярыҡ ялғаш

Башымдағы уйҙар,
Маңлайҙағы һырҙар,
Йөрәгемдән сыҡҡан
Иң һағышлы йырҙар —

Күҙҙәремдән ике
Яҡҡа аҡҡан йылға.
Башымдағы уйҙан
Сәстәр ағарҙылар.

Ярыҡ ялғашыма
Ҡарап уйлайым.
Ике йылға аға...
Илайым, илайым.

Һөйөү — ярыҡ ялғаш
Минең менән һинең.
Һыуҙа тыпырсына
Ике балам минең.

Буямасы әле күҙҙәреңде

Буямасы әле күҙҙәреңде,
Былай ҙа бит матур
күҙҙәрең.
Ҡайғы төҫө — ҡара,
Ҡарашыңды
«Һә» тигәнсе ҡуя
үҙгәртеп.
...Аҡ ҡулдаҡтан инең.
Аҡ ишекте
Туҡылдатҡас,
эстың алтырап.
Нисәмә йыл йәшәп
күргәнем юҡ
Яҡтылыҡты бынан
яҡтыраҡ!
Күҙ нурҙарың,
ай нурҙарын уҙып,
Ашанылар төндөң
ҡараһын.
Әлә булып, күкрәгемә үтел
Яманылар йөрәк яраһын.

Буямасы әле күҙҙәреңде,
Былай ҙа бит матур
күҙҙәрең.
Ап-аҡ булһын өйҙәң
ишектәре,
Ап-аҡ булһын һинең
йөҙҙәрең.

* * *

Толомоңдо таң елдәре
түгел,
Толомоңдо тыным тарата.
Һуңғы көсө йыйып
бышылдайым:
«Мин яратам һине,
яратам!»

* * *

Күҙҙе йомһам,
һин эргәлә генә,
Күҙҙе асһам,
уға ҡасаһың.
Күҙҙе йомғанда ла,
асҡанда ла
Бергә булыр ваҡыт
ҡасан һуң?

* * *

Мөхәббәттең яҡтылығы
булып
Күҙҙәреңә әгәр күсмәһәм,
Ҡәберемдә серең ятыр
инем,
«Һөйөү» тигән дарыу
эсмәһәм.

Мөхәббәт һәм кәкүк

Утыҙ минут—утыҙ мең ут
Мөхәббәт усағында.

Фәрүәз СӘЙФУЛЛИН

Утыҙ минут тороп торҙоң
Һин минең ҡосағымда.
Өнһөҙ ҡалып һин
тыңланың
Йөрәгем һөйләшеүен.
Үҙ-үҙемдең бәхетемдән
Йәшермәй көнләшеүем.
Яңғыҙ ҡайын ағасына
Кәкүк килеп ултырҙы.
Ултырҙы ла:
«Мин кәкүк!» — тип,
Утыҙ тапҡыр ҡысҡырҙы.
Кәкүк шулай өҙгөләнде
Яңғыҙаҡ булғанына.
Утыҙ тапҡыр
бышылданым
«Һөйәм», тип ҡолағыңа.

Әгәр килһәң...

Ҡотһоҙ донъя әй
ҡотланыр ине,
Һөйөү килһә әгәр яныма.
Уны күреп,
үлем түшәгемдән
Күтәрелер инем яй ғына.

Күҙҙәренә ҡарап
мөхәббәттең
Тик ултырыр инем
көн буйы.
Көтә-көтә уны,
һағыныуҙан
Булдым инде һары
томбойоҡ...

Һөйөү булып яндарыма
килһәң,
Үбер инем һине туялмай.
Мөхәббәткә булған
зарығыуҙы
Әжәл хатта үҙе тыялмай.

Яҙ инде, яҙ хаттарыңды...

Ғазаплама инде улай—
Яҙ инде, яҙ хаттарыңды.
Хатың килһә, егә һалып
Мисәүҙәргә аттарымды,

Ел еткермәй елер инем,
Мөхәббәтем, һиңә табан.
Атҡайҙарым ярты юлда
Хәл йыйырға туҡтаһалар.

Ҡош телендәй хатты алып
Мин ҡош булып
талпынырмын,
Осоп барған уҡҡа ҡунып,
Һинең янға атлығырмын.

Барып еткәс, устарыңа
Ҡуныр ҡына һайрар инем.
Мөхәббәтте һайлап булһа,
Гелән һине һайлар инем.

Ғазаплама инде улай —
Яҙ инде, яҙ хаттарыңды.
Хатың бөтһә, ҡаным бөтөп
Тамырҙарым ҡатарылыр.

● Әкиәттәр

Флүр ЯХИН

ҠАР БӘПЕС

Борон-борон заманда ҡара урман эсендә бер әбей менән бабай йәшәгән. Был тирә-йүн тотошлайы менән хазина олһы булған. Аҡҡан йылғаларҙың төбө ҡом урынына алтын бөртөктәре менән түшәлгән. Көмөш һыуы бәрҙе, бағры, суртан, алабуға һәм башҡа әллә ниндәй затлы балыҡтар менән лығырҙап торған. Әбей күнәгә менән һыу алғанда бер юлы йылғанан балыҡ та һеҙеп алып ҡайта, имеш. Бабай ҙа һунарға алыҫ йөрөмәгән: тупһаһы аша атлау менән үҙе теләгән йәнлекте тотоп та алған.

Был әбей менән бабайҙың өйҙәре төрлө-төрлө затлы таштарҙан, ағастарҙан, ҡабырсаҡтарҙан, ҡырып-һырлап яһалған тәтәй уйынсыҡтарҙан тулған. Улар яҡты ҡояш нурҙарына күмелеп, йылтырашып, көләшеп-йылмайышып, шаярғылары килеп ятҡан. Тик бына ошо уйынсыҡтарҙың уйнатыр кешеһе — бәләкәй хужаһы юҡ икән. Әбей менән бабайҙың етеш донъяларында бер генә шатлыҡ етешмәгән: уларҙың бер генә бәпесе лә булмаған.

— Бабай, миңә күңелһеҙ бит әле, ҡарҙан әллә бәпес яһап бирәһеңме?» — тигән берҙән-бер көн әбей. Бабай, бик тыңлаусан булмаһа ла, әбейҙең был теләген үтәмәй булдыра алмаған. Берҙән-бер көн ул әбейенә иҫ киткес бер матур ҡар бәпес эшләп алып ингән.

Бәпес быларҙың өйҙәренә инеүе була, былай ҙа яҡты өй эсе тағы ла яҡтырыбыраҡ, нурланыбыраҡ, ә әбей менән бабайҙың да былай ҙа яҡты йөҙҙәре тағы ла көләсләнеберәк, асылыбыраҡ китә. Былар йылмайышып, иҫтәре китеп ҡар малайға ҡарап ҡатҡан. Башта ятһыныбыраҡ торған бәпес, бер аҙ шымып-шымтайып алғандан һуң, ҡапыл: «Ә-сс-әй!» — тип ҡысҡырып ебәрә лә әбейҙең ҡосағына ташлана. Ауыҙы ҡолағына етеп кинәнеп торған әбей, ҡуйынына килеп ингән ҡарлы-боҙло һыуыҡтан сирҡанып, сар итеп ҡалған. «Ah! Oh! Ah! Oh!», — тип бер һүҙ өндәшә лә, һөйләшә лә алмай, һыны ҡатып, тыны ҡурылып тик тора, ти. Эргәһенә бабайы килеп баҫҡан. «Әбей, ни булды, ҡырағай йәнлектән дә яман ҡысҡырҙың түгелме?» — тиеүе була, әбей әйләнеп килеп ҡар бәпесте бабайына тотторған. Йылы ҡосағына көтмәгәндә килеп ингән ҡар малай бабайҙың да һушын алған.

Ахмалға төшкән әбей:

— Бабай, мин уны албырғатып торам, ә һин шул арала мейескә яҡ, бер аҙ йылынып алайыҡ, өй һыуыны, — тигән.

Бабай мейескә яҡҡан. Былар икәүләп мейескә ҡапланып йылына башлаған. Ни күҙҙәре менән күрһендәр, теге ҡар малай мейестән ситкә сигенә, ти. Быны күреп ҡалған бабай усаҡҡа утын өҫтәп, утты ҡыҙҙыра төшкән. Өй әҫергәс, ҡар бәпестең хәле бөтә башлаған. Ул ҡосаҡҡа ташланмай, гел иҙәндә генә йөрөй икән. Йә булмаһа, ишек йәки тәҙрә төбөндә, баяғы үҙе типкеләп үткән матур тәтәйҙәрҙе ҡулына алып ултыра, ти. Ҡар бәпес булһа ла, үҙҙәре менән уйнаштыра башлағанға, уйынсыҡтарҙың һөйөнөсөнөң сиге булмаған.

Ошонан һуң әбей менән бабай өйҙәрен йылы тоторға тырышҡан. Ә бер көндө мейескә ҡабыҡ, юныҫҡы ғына яғып йоҡлап китеүҙәре була, өй һыуыныуы менән, ҡар бәпес әбей менән бабайҙың урталарына һикереп менә. Ҡурҡыштарынан уянып киткән әбей менән бабай икеһе ике яҡ стенаға барып ҡаҡлыға. Ҡараңғыла йәнә баҫтырыш китә. Әбей менән бабай алмаш-тилмәш ут яғып, сиратлап йоҡлай, ти.

Яҙ етеп, көндәр оҙая, ҡояш тура ҡарай башлағас, ҡар бәпестең хәле бөтә. Ул инде һәр саҡ ишек төбөндә бойоғоп ҡына ултыра. Ҡар бәпес бабайға ла, әбейгә лә бик йәл була. Улар мейес яҡмай, өй ишеген һәр саҡ асып тотһалар ҙа, бәпестәре ултырған урынынан ҡуҙғалмаған. Ә бер көндө иртән торһалар, ул кистән ултырған урындан еүеш тап ҡына тороп ҡалған.

Бәпестәре иреп бөткәс, әбей менән бабай күңелһеҙләнгән. Үҙҙәренә күп мәшәҡәт, хәсрәт килтергән ҡар балаһы һағынып, йыш ҡына илашып иҫкә алғандар. Шунан әбей: «Һин миңә ысын бәпес алып ҡайт!» — тип талап ҡуйған. Бабай көн дә иртәнсәк төбө алтындан түшәлгән көмөш йылға ярына барып баҫа ла һыуға төбәлеп, берәй бәпес ағып килмәҫме, тигән өмөт менән оҙаҡ итеп баҫып тора икән. Бер көндә ул үҙенең көндә килә торған урынында бала илаған тауыш ишеткән. Абайлабыраҡ ҡараһа, ебәк ҡорғанлы алтын бишек эсендә бер бәләкәс кенә бәпес ағып килгәнен күргән. Бишекте сутылдығы сығып төрлө-төрлө матур ҡоштар һайрап оҙатып килә икән. Бабай бәпесле бишекте йәһәт кенә эләктереп ала ла, артына ла әйләнеп ҡарамай, әбейенә: «Һөйөнсө!» тип ҡысҡыра-ҡысҡыра өйөнә тороп саб...

ШЫМА САНА

Алыҫ-алыҫта йәшәгән, ти, бер әбей. Ул иртәнән кискә тиклем йөн илгән, бәйләм бәйләгән, балаҫ һуҡҡан. Булған, ти, был әбейҙең бабайы. Ул көнө-төнө утын ярған, таҡта юнған, бүрәнә әрсегән, ҫимәлер төҙөгән, бысҡан-йышҡан. Әбейҙең ҡыҙыҡ ҡына бер ҡылығы булған: ул, бәләкәс ҡыҙҙар кеүек, шырҡ-шырҡ көлә-көлә сана шыуырға ятҡан. Берҙән-бер көн әбей үҙенең бабайына:

— Бабай, миңә бер уйынсыҡ шикелле генә ҡупшы сана яһап бир әле. Юҡһа, шыуып уйнай торған санам бигерәк иҫкерҙе, бигерәк ауыр үҙе, үҙе бер төҫкә лә буялмаған, биҙәк-маҙары ла юҡ, — тигән. — Иң матур, иң шыма сана кәрәк. Ауыҙ йырып тороусы бала-сағаға көнләшерлек булһын, — тип тә өҫтәгән.

Шул көндө үк бабай әбейенә еңел сана яһарға тотонған. Уға арҡаһын һөйәп ултырырлыҡ итеп һөйәлгестәр эшләгән, төрлө-төрлө аллы-гөллө буяуҙарға буяған, ырып-ырып биҙәктәр менән семәрләгән. Күҙ яуын алырлыҡ, хас уйынсыҡ төҫлө ғәжәп матур сана килеп сыҡҡан.

— Булды ғына, әбей. Бар, рәхәтләнеп саф һауала сана шыуып кер, — тип әбейен тауға сығарып ебәргән.

Киткән, ти, әбей санаһын һөйрәп тауға. Менеп еткән был, ултырып алған арҡаһын терәп теге матур санаға. Тик ни ғәләмәт: шыҡлап аҫҡа шыуып төшәйем тиһә, санаһы шыумай ҙа ҡуя, ти. Сана табандары ҡарға йәбешкән дә ҡуйған. Этеп-этеп ҡарай әбей, юҡ, сана тау түбәненә шыуырға уйламай ҙа! Табандарын тереп ҡарыша, ти. Әбейҙең шыумаҫ санаһынан балалар эстәрен тырнап көлгән. Әрләп тә ҡараған әбей санаһы, юхалап, инәлеп тә ҡараған. Ахырҙа, бәләкәс ҡыҙҙар кеүек үкереп илап, өйөнә ҡайтып ингән.

— Ба-абай, шы-ыума-ай бит ма-атур сана, табаны ҡарға йәбешә лә ҡуя-я-я, — тигән, ти, үкһеп.

Әбейен йыуатып-йыуатып та илауҙан туҡтата алмағас, бабай сананы тау башынан барып алған. Ҡайтһа, әбей, аяҡтарын иҙәнгә бәреп-бәреп һаман илау өҫтөндә, ти. «Иң шәп сана һинеке буласаҡ, тынысылан», — тигән бабай. «Шәп шыуһын шул, юҡһа иң бәләкәс балаларға тиклем минән көлә бит», — тигән әбей ахырҙа, йәштәрен күҙҙәренән ҡул һырты менән һөртә-һөртә.

Бабай әбейенең һүҙҙәренә артыҡ иғтибар биреп тормаҫтан, һүҙ ҡупыртып тормай ғына, тыныс ҡына сана табандарын шымарта биргән. Әй шымарта, әй шымарта, ти, был. Йылтыратҡансы шымартҡан да сананы ҡабат әбейенә тоттороп, тау шыуырға сығарып ебәргән.

Киткән, ти, әбей санаһын һөйрәп баяғы тауға. Менеп еткән, ти, ул. Эре генә ҡылана, ти, үҙен күҙәтеп көләп торған малай-шалай, ҡыҙыҡай-мыҙыҡайҙарға әйләнеп тә ҡарамай, ти. Һөйәнгескә һөйәлеп ултырып алған да шыуып төшөп киткән. Әммә ни ғәләмәт: сана тауҙың яртыһына тиклем шыуған да туҡтаған. Әбейҙең шыуыр-шыумаҫ санаһынан балалар эстәре ҡатып көлгән. Әрләп тә ҡараған әбей ҡарышҡыр сананы, туҡмап та ҡараған, юҡ, шыумағас шыумай ҙа ҡуя инде сана. Әбей тағы үкереп илап өйөнә ҡайтып киткән. Бәләкәс ҡыҙҙарҙан да ныҡыраҡ ҡысҡырып илай, ти, был.

— Ба-а-бай, шш-ыумай бит ма-а-атур сана, табаны ярты тауҙа уҡ ҡарға йәбеште лә ҡуйҙы. Артабан шыуырға уйламай ҙа, — тип хәбәр һалған тағы бабайына үкһей-үкһей.

Тотонған, ти, бабай, тағы әбейен йыуатырға. Тегеһе уның һайын, оторо ҡотороп илай, иҙәнгә һуҙылып ятып, аяҡтарын тыҙып-тыҙып үкерә, ти, был. Йыуатып-йыуатып та илауҙан туҡтата алмағас, киткән, ти, бабай тағы сана артынан. Алып ҡайтҡан да әй шымарта, әй шымарта, әй шымарта, йылтыратыу ғына түгел, күҙгә шикелле итеп, донъя күренмәле ялтлатып ҡуйған, ти. Өс көн, өс төн йылтыратҡан. Табандарҙан әле илап ултырған әбей күренә, әле көлөп ултырған бабай күренә, ти. Ҡояш нурҙарына сағылып, өй эсе яҡтырып-яҡтырып китә икән.

— Булды ғына, әбей, иң шәп шыуған сана һинеке булды, — тигән бабай.

Сананы алған да киткән, ти, был баяғы тауға. Менеп еткән, күкрәкте киреп, арҡаны тереп, эре генә менеп ултырған шыма санаға, шырҡылдап көләүсе малай-шалайҙа, ҡыҙыҡай-мыҙыҡайҙарҙа эше лә юҡ, ти. Бына ул ҡоштай осоп, күҙ асып йомған арала шыҡлап аҫҡа шыуып төшөп киткән. Артынан ҡар туҙаны ғына борҡ итеп ҡалған. Бала-саға көләүенән шып туҡтаған. Тик ни ғәләмәт: ҡараһалар, әбейҙең санаһы аҫҡа төшөп еткәс тә туҡтамай ҙа ҡуя, ти. Шыуып китеп тик бара. Балалар эркелешеп уның артынан йүгергән. Абына-һөрлөгә шыма сана артынан саба, ти, былар. Әбейҙең санаһына һикереп ҡуша ултырып алыусылар ҙа табылған. Берәүҙәр арттан йәбешкән, берәүҙәр сананың эсенә үк инеп сумған.

Ҡаршыға әбейҙең бабайы йүгереп сыҡҡан. Тәнтерәкләп был да сана артынан йүгереп ҡараған була, ти.

«Әбей, әбекәйем, туҡтат инде санаңды, етер инде, йә берәй ергә мәтәлеп барып төшөрһөң, мине етем итерһең», — тип һөрәнләй, ти. Ә сана туҡтамай ҙа туҡтамай, шыуа ла шыуа. Әбей ҡыуанысынан сабый бала һымаҡ көлә лә көлә. Бер заман әбейҙең күҙҙәренә бабайының ҡурҡыныс йөҙө салынған. Шатлығы шундуҡ ҡурҡыу менән, көләүе илау менән алмашынған. «Туҡтатығыҙ сананы-ы!» — тип һөрәнләй ҙа бит, тик сана шыуа ла шыуа икән...

СТУДЕНТ КӨНДӘЛЕКТӘРЕ

Алда ни тиклем ҡыҙыҡлы тормош һәм яңы тәьҫирҙәр тора. Бик һағындым мин был көндәрҙе!

Бына баш осомдағы Союз картаһында минең йөрәгем тора! Йөрәгем! Күпме унда үтелгән тарих, матурлыҡ, мөхәббәт! Был йөрәкте мин ҡалын итеп ҡыҙыл ҡәләм эҙҙәре менән әйләндереп алдым. Унда минең бөтә эшләйәсәк эшем, унда минең бәхетем.

Башҡортостан картаһы! Бөгөн генә элдем. Йылғаларҙы күккә буяным. Ағиҙел, Ҡариҙел, Йүрүҙән һәм Әй. Үҙем буласаҡ урындарҙы билдәләй барам. Әҙерлекте бөгөндән башларға! Хәйерле юл, егет!

Даһи (Даһи Бабичев — Т. Ҡ.) менән кәңәшләшергә һәм маршруттарҙы билдәләргә, йөрөйәсәк райондарҙы асыҡларға кәрәк. Бабич, әлбиттә, күп нәмәлә минең менән бер фекерҙәге кеше түгел. Ләкин ул юлдаш булырға тейеш! Был йәй тормошомдоң ҙур мәктәбе булһын ине. Сөнки мин беренсе мәртәбә ауыл һәм әҙерлекле рәүештә үҙ халҡым менән танышасаҡмын. Мин — һуҡыр, тома һуҡыр. Күҙҙе асырға ваҡыт.

Матди яҡ, әлбиттә, бик ауыр буласаҡ. Союздан ярҙам һорау уңайһыҙ. Әле Ленинградҡа барыу өсөн һорағанға ла үкенеп бөтә алмайым. Мостафа ағай алдында уңайһыҙ. Хәҙергә бөтәһе лә үҙем өсөн бит. Әле файҙаһыҙмын.

25 март, кесаҙна.

Иртән Бабич килде. Карта янына ултырттым да һөйләшә башланыҡ. Беренсе походтың маршруты: Дәүләкән — Асылы күл — Ҡандра күл — Туймазы — Октябрьский — Аксаково — Шафран — Өфө.

Борис Ромашов «Гоголь — бөйөк рус драматургы» тигән темаға әңгәмә үткәрҙе. Ижади семинарҙа Виктор Косенковтың шиғырҙары тикшерелде. Америка тураһында йүнһеҙ шиғырҙар яҙып, былтыр яҡшы ғына туҡмалғайны. Файҙаға булған икән. Беренсе ҡат семинарҙа мин дә сығыш яһаным. Ләкин уңышһыҙ. Шайтанғамы инде ырғып сыҡтым?

Көндөҙ Рәшит Ниғмәтиҙе уҡып йөрөнөм. «Һинең кәләшеңдең хаттары»н. Тик быйыл уның йәки Мостафа ағайҙың премия алмауы йөрәкте әрнетте. Ғәҙелһеҙлек, минеңсә. Бик көткән инем.

Әсғәт инде күптән күренмәй. Балыҡ кеүек, тауыштыны сыҡмай. Сәйәхәт тураһындағы пландарҙы уға һөйләйһе ине. Юлдаш булһа, бик шәп булыр ине.

Аҡса юҡ. Үткән айҙың ярты аҡсаһы китапҡа китте. Был айҙа тыйылып торорға кәрәк. Әлбиттә, үҙ китапхананды үҫтереү фекере көндән-көн ныҒый. Хәҙер тәртипле рәүештә газеталарҙы тегеп барам. Өлгөрәм. Юлға төшөп алдым.

26 март.

Иван Алексеевич Новиков менән осрашыу. «Пушкин и Слово о полку Игореве» — яңы сыҡҡан китабы.

— Оҫталыҡ әле ижад түгел. Ижад итеү — бөйөк нәмә. Ҡат-ҡат эшләүҙән ҡурҡмағыҙ. Малай саҡта уҡ грек философияһы менән мауыҡтым. Аҙаҡтан яңынан уҡыным. Уҡыған һайын классиктар яңы! Әҫәрҙәр төрлө температуралы, ә уҡыусының һиҙгер термометр. Насар яҙһаң да үҙеңсә яҙ. Оҡшарға тырышыуҙан алла һаҡлаһын. Был ижад түгел. Һәр бер әҫәрҙә авторҙың үҙ портреты бар. Беҙҙең һәр беребеҙ өсөн әҙәбиәт — тормош. Ял итеү юҡ. — Эшлә! Үҙ-үҙеңә тоғро бул. Аҡыллы булһаң да һалҡын булма, ҡайнап йәшә тормошта. Яҙыр өсөн түгел, үҙеңдең йәшәүең өсөн ҡайна. Уҡыу әле классиктарҙы өйрәнеү

түгел. Өйрәнеп уҡырға кәрәк. Яҙыусы күрһәтә һәм кешеләр, ғәжәпкә ҡалып, тормошто күрәләр. Был — ҙур яҙыусы. Тормошто тәрән белеү һәм бөйөк хеҙмәт кенә кешене яҙыусы итә. Ижад ҡасан башлана? Ул оҙаҡ йылдар йәшәй, өлгөрә. Пушкин Борис Годуновты бала саҡтан тыуҙыра. Пушкинда йылдар буйы ижади орлоҡ өлгөрә.

Бик тиҙ өлгөргән орлоҡ та була.

Мин башта Пушкин тураһындағы бөтә әҙәбиәтте уҡып сығырға ҡарар иттем. Быға байтаҡ йылдар китте. Материалдарҙы бик һаҡлыҡ менән өйрәнергә! Мемуарҙарҙың һәр береһе лә дөрөҫ булып бөтмәй. Үҙ материалдарыңдың тулы хужаһы булыу кәрәк.

Тарих аҙымын нисек тыңларға?

1905 йылды мин, үҙем ҡатнашһам да, ҙур ваҡиға итеп тойманым. Ә 1914 йылда донъя һуғышы башланды. Мин уны ныҡ тойҙом. Буласаҡ 1917 йыл революцияһы итеп тойҙом.

Аҙаҡ Новиков 1940 йылда яҙылған ике шиғырын уҡыны.

Бер йылдан һуң май айҙарында Новгород-Северскийҙа бөтә славян съезын саҡырыу тураһында уйлайҙар икән.

27 март.

Ижади семинар. Крюковтың авиация тураһындағы шиғырҙарын тикшереү. Авиацияла хеҙмәт итә. Механик булып. Шиғырҙары бер темаға ҡоролған. Уларҙа тере кешеләр бар. Ләкин характерҙар юҡ. Әйтергә, һөйләргә түгел, күрһәтергә кәрәк. Фекер образдар аша бирелергә тейеш. Поэзия кешенең эске донъяһы менән эш итә. Профессиональ өлкә иһә — фон ғына. Шиғырҙар ялҡытҡыс бер тигеҙ. Крюков: тормошто яҡшы белә, ләкин поэтик табыштар бик аҙ.

28 март.

Горькийҙың тыуған көнө. Совет әҙәбиәте семинарында Бурсовтың «Мать» Горького и проблемы социалистического реализма» китабын тикшерҙек.

Бөгөн Даһиҙа ҡундым. Төнө буйы һөйләшеп сыҡтыҡ. Башта уның бөтә баҫылған мәҡәләләрен ҡараныҡ, әсәһе Мәҙхиә Бабичеваның шиғырҙарын уҡыныҡ. Хәҙер яҙмай, ти. Ә ваҡытында балалар өсөн бер китап та сығарған. Әхнәф Харисов менән бергә уҡыған. Һуғыш ваҡытында агитацион шиғырҙар яҙған. «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналында педагогик мәҡәләләр менән ҡатнашҡан. Даһиҙың атаһы Әкрәм Бабичев та Мәскәүҙә сыҡҡан ветеринария журналында үҙенең фәнни хеҙмәттәрен баҫтырған. Даһиҙың әсәһе уҡытыусы булып эшләй хәҙер. Тәрбиәләнгән ғаиләһе бөтөнләй мин үҫкән шарттарға оҡшамаған Даһиҙың. Сағыштырып ҡараһам, бөтөнләй ҡырағай булып үҫкәнмен икән дә мин!

Даһи үҙенең театр менән ҡыҙыҡһыныуы, училищела саҡта Дәүләкәндә драмтүңәрәк етәксеһе булыуы, Мирхәйҙәр Фәйзиҙең «Ғәлиәбаныу»ында Исмәғил, Бикбайҙың «Ҡарлуғас»ында Шатморат һәм старшинаны уйнауы, тәүге мөхәббәте Флүрә хаҡында һөйләне. Мин бик бирелеп тыңланым. Кешеләр миңә, ғөмүмән, бөтә ваҡлыҡтарға тиклем бәйән итергә ярата. Быныһы, бәлки, минең бик кәрәкле яҡтыр. Тыңлайым, төпсөнәм.

Бик оҙаҡ йоҡлай алмай яттыҡ. Ҡыҙҙарҙан алған хаттарҙың иң күңеллеһе — Диларанышы. Ни тиклем бала ул!

Бөгөн бал бейеүҙәренең икенсе занятиеһы. Йөрөй торғас, ныҡлап өйрәнергә булдым. Яҡшы кисәләр була. Уйнарға, көлөргә тура килә. Ә һин, ҡарға балаһылай, кеше күҙенә ҡарасҡы булып уптайып ҡарап ултыр! Әйҙә, ятып ҡалғансы атып ҡал. Башланым.

Бик ҡыҙыҡ килеп сыҡты. Миша мине бик димләй ине, йөрө лә йөрө, тип, кәңәш ит, тинем, ниндәй ҡыҙҙы һайлап алырға? Миша аҡыл бирҙе. Ҡолаҡҡа уның һүҙҙәрен алҡа итеп элеп ҡуйҙым. Тоҫҡа насар ҡыҙ булһын! Улар башҡаларға күсмәй. Һинеке генә буласаҡ, ә был бейеүҙә бик мөһим! Өйрәнгән менән уңайлы, ҡаушап тормайһың. Ҡыҙ һинән оҙон булмаһын! Әммә һыны килбәтле кәрәк. Матур ҡыҙҙарҙан ҡасырға тырыш! Ярай, хоҙайға тапшырҙым. Түңәрәккә Ҙур театрҙың балет артистары етәкселек итә. Етәксе миңә тәүге аҙымдан уҡ иғтибар итте: иҫкәрмә эшләне. «Ысын кавалер бул», — тине. Был һүҙҙән йөрәккә әллә күпме дәрт бөркөлдө. Намыҫланып киттем. Иң ябай элементтар башланыҡ. Ҡыҙ һайларға ҡушҡас, бөтәһе лә тиҙ генә парлашып бөттө лә ҡуйҙы. Ә мин Мишаның кәңәше буйынса тәпәш кенә, йәмһеҙ генә ҡыҙ эҙләйем. Күҙ менән генә!

(Дауамы. Башы 1—6, 11—14-се һандарҙа).

Почтанан

Ваҡыт түгелме?

Баймаҡ ҡалаһында башҡорт телен өйрәнеү балалар баҡсаларында, мәктәптәрҙә алып барыла. Ҡаланың бығаса рус мәктәбе тип һаналыусы 2-се урта мәктәбенең эше иғтибарға лайыҡ. Бынан 8 йыл элек мәктәптәге башҡорт балалары туған телдә өйрәнә башлағайны. Ә 1989-1990 уҡыу йылында 1 кластағы рус балалары ла башҡорт телен өйрәнә. Балалар дәрестәргә теләп йөрөй. Өҫтәүенә, быйыл бында саф башҡорт класы асылды. Киләсәктә был мәктәп ҡалалағы башҡа мәктәптәр һымаҡ башҡорт-рус мәктәбе буласаҡ. Бөтә был эштәрҙең башында директор В. Н. Иванов тора.

Ләкин күңелде борсоған мәсьәләләр ҙә байтаҡ.

Китап магазиныбыҙҙа башҡортса китаптар оҙаҡ ятмай. Балалар өсөн китаптар һуңғы ваҡытта матур нәшер ителә. Абдулхаҡ Игебаевтың, Сөләймән Муллабаевтың китаптары кескәйҙәр күңеленә хуш килде. Тик улар ҙа тиҙ арала таралып бөтә. Шуға күрә беҙҙең районға башҡортса китаптарҙы күберәк ебәреп булмаймы икән?

Миңә республика, зона күләмендә үткән фәнни-техпрактик конференцияларҙа ҡатнашырға тура килде. Һәр конференцияла туған телде уҡытыуҙың кимәлен күтәреү буйынса рекомендациялар ҡабул ителә. Мәҫәлән, башҡорт яҙыусыларының, сәнғәт эшмәкәрҙәренең, ғалимдарының тормошон һәм ижадын сағылдырған альбомдар, Башҡортостан рәссамдарының картиналарынан репродукциялар сығарыу мәсьәләһе. Мәктәп өсөн бик кәрәкле әсбаптар. Ләкин ошоларҙың әлегә беҙҙә береһе лә юҡ.

Һүҙҙән эшкә күсергә ваҡыт түгелме?

Г. ЯМАНТАЕВА,
Баймаҡ интернат-мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы.

Бәйләнеште нығытайыҡ

Газетаның һәр һаның уҡып, йәшәреп киткәндәй булам. Миңә 48 йәш, заводта инженер булып эшләйем.

Әлеге ваҡытта Туймазыла киоскыларҙа «Йәшлек»те алырға өлгөрөп тә булмай. Тиражды арттырыу маҡсаты менән мин үҙ сиратымда быйыл уҡ республиканан ситтә йәшәгән ике туғаныма газета яҙҙырҙым. Әгәр башҡа уҡыусылар ҙа шул өлгөгә эйәрһәләр, быйыл уҡ подписканы арттырыуға өлгәшә алыр инегеҙ. Ә киләһе йылға газетаға яҙылыу ваҡыты еткәс, һәр районда, мәктәптә, ойошмала, колхозда осрашыу үткәреүҙе ойошторорға кәрәк. Быларҙы урындағы ижади берекмәләр менән бергәләп үткәреп була. Мәҫәлән, Туймазылағы «Алтын башаҡ» берекмәһе. Улар менән бергә район буйынса махсус бит ойоштороп ауылдарҙы байҡағанда бик уңышлы булыр ине минеңсә. Тимәк, хәҙерҙән ижади берекмәләр менән бәйләнештәрҙе нығытырға кәрәк.

Ю. ХӘЙРИСЛАМОВ.
Туймазы.

Ҡотой ауылы тарихы

Һәр бер ауылдың үҙ тарихы бар. Миҫалға Учалы районы Ҡотой ауылын ғына алайыҡ. Уның тарихы нимәнән ғибарәт һуң?

Ҡарттарҙың фараз итеүе буйынса, Ҡотой ауылы бынан 250—300 йылдар самаһы элек барлыҡҡа килгән. Хәҙерге Ҡотоевтар ырыуының ата-бабалары, башлыса, Тирлән поселогы эргәһендә йәшәгән. Ҡотойҙоң атаһы был ергә рустарҙың күсеп килеүен белгәс, улдары Ҡотой, Ҡолош, Сураголға уларҙан алыҫыраҡ ергә — Урал аръяғына барып ерегергә ҡушҡан. Тәү башлап Ҡотой үҙенең ғаиләһе менән Яйыҡ йылғаһына яҡын булған «Алат» тигән ергә нигеҙ ҡорған. Ул заманында бик бай кеше булған. Телдән-телгә күсеп һөйләүҙәргә ҡарағанда, уның өйөр-өйөр йылҡыларының иҫәбе-һаны булмаған. Әгәр ҙә бер ҡыуаҡлыҡ йылҡы малы менән тулған булһа, тимәк, улар теүәл тип һаналған. Тирлән поселогы эргәһендәге «Кутуевское болото» тигән үйһыулыҡтың атамаһы ошоға бәйле, тип фараз итергә була. Һуңынан Ҡотой, «Олотау»ҙы аша сығып, кире көнбайышҡа табан — Ҡолош туғаны йәшәгән ергә нигеҙ һала. Был ерҙәр мул һыулы, балыҡҡа бай Шәгәр йылғаһы, ҡалын урмандары, йәшел болондары, бейек тауҙары менән дан тотҡан булған. Бына шулай итеп Ҡотой ауылы барлыҡҡа килгән.

Һ. ХАРРАСОВ.

Учалы.

Шағир һүҙе

Зианчура районы Ибрай һигеҙ йыллыҡ мәктәбендә шағир Сергей Чекмаревтың ижадын өйрәнеүгә арналған кисә булып үҙҙы.

Ялҡынлы патриоттың исеме беҙҙең төйәгебеҙ менән ныҡлы бәйләнгән, уның ижады ошо ерҙәргә тамырланған. Сергей Чекмарев менән бергә эшләгән олкән йәштәге Әбделфәнә Әхмәтғәзиз улы Кирәев ихлас, ябай һәм тулҡынландырғыс итеп сығыш яһаны. Рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, хеҙмәт ветераны, ҡурайсы Әхмәтсәлим Яҡупов тиғыҙ йәшлеҙ малай сағында шағирҙы күреп иҫендә ҡалдырыуы, фажиғәле үлеменән һуң ауыл халҡының уны ололап ерләүе тураһында иҫтәлектәр менән уртаҡлашты.

Ошо яҡтарҙа — Һүрәмгә күрше Өҫкәлек буйында тыуып үҫкән шағир Мәхмүт Рухи үҙенә йәшлек йылдарында Сергей Чекмарев әҫәрҙәре нисек тәьҫир итеүен хәтерләп һөйләне, шиғырҙарын уҡыны.

Бынан һуң Сергей Чекмаревҡа арнап йыл һайын 13 ғинуарҙа әҙәби дәрестәр үткәрергә ҡарар иттеләр. Ибрай ауылы халҡы культура йортона мемориаль таҡтаташ эшләтеп ҡуйырға булды.

Х. ХАЗИЕВ.

Телевидение программаһы: 5—11 февраль

ТВ

душәмбе

5 ФЕВРАЛЬ

«ОРБИТА-4» — «ВОСТОК»

6.00 120 минут.
8.15 Мультфильмдар.
8.25 Фигуралы шыуыу. Европа беренселеге. Ленинградтан тапшырыу.
10.55 «Стоп-кадр». Фәнни-популяр кино күҙәтеү.
11.55 Коллаж (Реклама. Иғландар. Информация).
12.00 Н. Метнер. Квинтет.
12.30 Документаль фильм.
15.00 Ашхабадтан тапшырыу.
15.35 Документаль фильм.
15.55 Балалар өсөн бер сәғәт.
16.55 Прогресс. Информация Реклама.
17.25 Коллаж (Реклама. Иғландар. Информация).
17.30 Фигуралы шыуыу. Европа беренселеге. Ленинградтан тапшырыу.
18.00 Ваҡыт.
18.30 Фигуралы шыуыу буйынса Европа беренселеге сығыштарының дауамы.
20.30 Ваҡыт.
21.00 П. И. Чайковский. «Евгений Онегин». Фильм-спектакль.
23.40 «Беҙҙең бурыстарыбыҙ». «Ниндәй ул — Гжель?»

«ДУБЛЬ-4»

8.00 Иртәнге гимнастика.
8.15—11.45 Уҡыу программалары.
12.05 «Ғазап сигеп йөрөү». 1-се серияһы — «Апалы-һеңлеләр».
16.30 Фильм-концерт.
18.00 Ваҡыт.
18.30 Мостай Кәрим. «Үткәндәргә күҙ һалғанда».
19.20 «Пламя» ансамбле сығыш яһай.
19.30 Тыныс йоҡо, кескәйҙәр!
19.45 Документаль фильм.
20.05 Д. Шостакович. «Алтын быуат» балетынан өҙөктәр.
20.30 Еңел атлетика. СССР беренселеге. Силәбенән тапшырыу.
21.20 «Тикшереү» Нәфис фильм. Тәүге тапҡыр.

шишәмбе

6 ФЕВРАЛЬ

«ОРБИТА-4» — «ВОСТОК»

6.00 120 минут.
8.00 «Күңелле стартар».
8.45 «Васька». Өс сериялы телевизион нәфис фильм. 1-се серияһы.
9.50 «Бурыстарыбыҙ».
10.35 «Был булды... булды...»
10.55 Балалар өсөн бер сәғәт.
11.55 Коллаж (Реклама. Иғландар. Информация).
12.00 Ваҡыт.
15.00 Фильм-концерт.
15.30 Документаль фильм.
15.55 Концерт.
16.25 «Һоҙланғыс утрауҙар». Яңы Зеландия тураһында.
17.25 «Һаумы, музыка».
17.55 Коллаж (Реклама. Иғландар. Информация).
18.00 Ваҡыт.
18.30 Башҡортостан (башҡортса).
18.50 «Үсмерҙәр өсөн «Йәштәш» программаһы (башҡортса).
19.30 «9-сы студия».
20.30 Ваҡыт.
21.00 Көнүҙәк әңгәмә.
21.10 Тамашасыларҙың һорауы буйынса. Композитор В. Добрыниндың ижади кисәһе.

«ДУБЛЬ-4»

8.00 Иртәнге гимнастика.
8.15 Фәнни-популяр фильм.
8.35—11.40 Уҡыу программалары.
12.00 «Ғазап сигеп йөрөү». 2-се серияһы — «Һайлау».
13.15 Ритмик гимнастика.
16.25 Тапшырыуҙар программаһы.
16.30 Нәфис фильм. «Юлдарҙа барлау».
18.00 Ваҡыт.
18.30 Йәштәр вестниғы.
19.10 Мультфильм.
19.30 Тыныс йоҡо, кескәйҙәр!
19.45 Документаль фильм.
20.05 «Салауат эҙҙәренән» (башҡортса).
20.25 «Ололар һәм балалар».
20.50 Иғландар. Реклама.
21.00 «Һәләкәткә тиклем ете сәғәт». Нәфис фильм.

шаршамбы

7 ФЕВРАЛЬ

«ОРБИТА-4» — «ВОСТОК»

6.00 120 минут.
8.05 «Һаумы, музыка!»
8.35 «Васька». Өс сериялы нәфис фильм. 1-се һәм 2-се сериялары.
10.55 «Ер шары тирәләй». Альманах.
11.55 Коллаж (Реклама. Иғландар. Информация).
12.00 Ваҡыт.
12.30 «Йәйгор». Шри-Ланка.
15.00 Документаль фильм.
15.30 В. Кандинскийҙың күргәҙмәһендә.
16.30 Концерт.
16.55 Балалар өсөн бер сәғәт.
17.55 Коллаж (Реклама. Иғландар. Информация).
18.00 Ваҡыт.
18.30 «Пульс-90». «Беҙ һәм экономика».
19.20 «Васька». Өс сериялы нәфис фильм. 1-се серияһы.
20.30 Ваҡыт.
21.00 Көнүҙәк әңгәмә.
21.10 «Көлкө тирәләй» (31 декабрҙәге тапшырыуҙы ҡабатлау).
23.05 Документаль фильм.

«ДУБЛЬ-4»

8.00 Иртәнге гимнастика.
8.15 Фәнни-популяр фильм.
8.25—11.35 Уҡыу программалары.
11.05 «Беҙҙең баҡса».
12.05 «Ғазап сигеп йөрөү». 3-сө серияһы — «Һуғыш».
16.30 Мультфильм.
16.45 Украин ССР-ы Дәүләт телевидение һәм радио тапшырыуҙары комитеты. «Ерем минең. Халҡымдың йылғаһы».
17.30 «Дуҫтар тауышы». З. Шарифуллина йырлай (Ҡазан).
17.55 Иғландар.
18.00 Ваҡыт.
18.30 «Башҡортостан».
18.50 «Хужа булыу тойғоһо. Бармы ул?»
19.30 Тыныс йоҡо, кескәйҙәр!
19.45 «Башҡорт телен өйрәнәбеҙ».
20.00 Калинин исемендәге культура йортоноң башҡорт вокаль ансамбле йырлай (башҡортса).
20.30 «Минең позициям». БАССР халыҡ депутаттарын һайлау буйынса 165-се һайлау округы. Баймаҡ районы (башҡортса).
21.15 Өфө өсөн программа. «Беҙ йәшәгән ҡала».
22.15 Баскетбол. Р. Короче кубогы. Ирҙәр. ЦСКА — «Босна» (Югославия).

кесаҙна

8 ФЕВРАЛЬ

«ОРБИТА-4» — «ВОСТОК»

6.00 120 минут.
8.05 «Левша» ансамбле сығыш яһай.
8.25 «Васька». Өс сериялы телевизион нәфис фильм; 2-се һәм 3-сө сериялары.
10.55 Балалар өсөн бер сәғәт.
11.55 Коллаж (Реклама. Иғландар. Информация).
12.00 Ваҡыт.
15.00 Еңеүҙең 45 йыллығына ҡарата. Документаль фильмдар.
15.50 Музыкаль хазина.
16.40 Документаль фильмдар.
17.40 Мультфильм.
18.00 Ваҡыт.
18.30 «...Ун алты йәшкә тиклем һәм унан өлкән».
19.10 «Васька». Өс сериялы телевизион нәфис фильм. 2-се серияһы.
20.30 Ваҡыт.
21.00 Көнүҙәк әңгәмә.
21.10 Документаль фильм премьераһы.
22.40 «Балет, балет».

«ДУБЛЬ-4»

8.00 Иртәнге гимнастика.
8.15, 11.05 Фәнни-популяр фильм.
8.45—11.35 Уҡыу программалары.
9.55 «Барыһын да белергә теләйем». Киножурнал.
12.05 «Ғазап сигеп йөрөү». Телевизион фильм. 4-се серияһы —«Дүртәү».
13.35 Ритмик гимнастика.
16.30 Мультфильм.
17.10 «Һеҙҙең йөрәшегеҙ, директор».
17.30 Тапшырыуҙар программаһы.
17.35 «Әкиәт йомғағы» (башҡортса).
17.55 Реклама.
18.00 Ваҡыт.
18.30 Башҡортостан (башҡортса).

18.50 Шиғри дәфтәр. Ғ. Дәүләтов. (башҡортса).
19.00 «Ҙур сәйәхәт». Мультфильм.
19.15 Баҡсасыларға кәңәштәр.
19.30 Тыныс йоҡо, кескәйҙәр!
19.45 Волейбол. Ирҙәр. «Динамо» (Мәскәү өлкәһе) — «Мавсиконо» (Италия).
20.30 «Йыр саҡыра». Ғ. Солтанова йырлай (башҡортса).
21.20 Өфө интеллигенцияһы клубы. РСФСР халыҡ депутатлығына кандидат яҙыусы М. Чванов, Өфө һәм Стәрлетамаҡ епископы Анатолий менән осрашыу.
22.20 Иғландар.
22.25 Хоккей. СССР беренселеге. «Спартак» — «Химик».

йома

9 ФЕВРАЛЬ

«ОРБИТА-4» — «ВОСТОК»

6.00 120 минут.
8.05 Мультфильмдар.
8.30 «Васька». Өс сериялы телевизион нәфис фильм. 3-сө серияһы.
9.45 Төркмәнстандың музыка фольклоры.
10.15 «...Ун алты йәшкә тиклем һәм унан өлкәндәр».
11.00 «Йәшә, ер».
12.00 Ваҡыт.
15.00 Телевизион документаль фильм.
15.25 Концерт.
16.10 «Шартлау биштә буласаҡ». Нәфис фильм (ЧССР).
17.15 Философик әңгәмәләр.
18.00 Ваҡыт.
18.30 «Ҡыш бабай биҙәктәре» (башҡортса).
18.55 Башҡортостан.
19.15 «Васька». Өс сериялы телевизион нәфис фильм 3-сө серияһы.
20.30 Ваҡыт.
21.00 Актуаль интервью.
21.10 «Был булды, булды...»
21.35 «Ҡараш».
23.05 Беҙҙең фондтан. РСФСР-ҙың халыҡ артисы Э. Грач концерты.

«ДУБЛЬ-4»

8.00 Иртәнге гимнастика.
8.15, 11.05 Фәнни-популяр фильм.
8.45—11.35 Уҡыу программалары.
9.55 «Барыһын да белергә теләйем». Киножурнал.
12.05 «Ғазап сигеп йөрөү». Телевизион фильм. 5-се серияһы.
16.35 Тапшырыуҙар программаһы.
16.40 «Ай ҡыҙы». Өфө ҡалаһы Комаров исемендәге Пионерҙар һарайы эргәһендәге балалар театры спектакле.
17.40 Беҙҙең ҡунаҡтар. Болгария ғалимы, профессор Васил Манев.
18.00 Ваҡыт.
18.30 Мультфильмдар.
18.35 Концерт.
19.15 Иғландар. Реклама.
19.30 Тыныс йоҡо, кескәйҙәр!
19.45 Халыҡ депутатлығына кандидаттарҙың телевизион трибунаһы. РСФСР халыҡ депутатын һайлау буйынса 783-сө Октябрь территориаль округы.
20.45 Өлкәндәр өсөн мультфильм. «Доктор Бартек һәм үлем».
21.00 «Төн уртаһындағы бүләк». Телевизион нәфис фильм. 1-се һәм 2-се сериялары.
23.05 Хоккей. СССР беренселеге. «Динамо» (Мәскәү) — «Крылья Советов». 2-се һәм 3-сө осорҙары.

шәмбе

10 ФЕВРАЛЬ

«ОРБИТА-4» — «ВОСТОК»

6.00 120 минут.
8.00 Фильм-концерт.
8.55 Беҙҙең баҡса.
9.25 Кеше институты.
10.25 Хайуандар донъяһында.
11.25 «Борис Пастернак». Тыуыуына 100 йыл тулыуға ҡарата.
12.30 Еңеүҙең 45 йыллығына ҡарата. «Ваҡыт беҙҙе һайланы». Биш сериялы нәфис фильм. 1-се һәм 2-се сериялары.
14.50 Балалар өсөн фильм.
15.00 «Иле бөтә теле бөткәндең». Р. Бикбаев (башҡортса).
15.20 Ғаилә экраны. «Француз теле дәресе». Телевизион нәфис фильм.
17.00 «Йәйғор». Оркестр тауышы аҫтында» (Швейцария).
17.30 Халыҡ-ара панорама.
18.15 «Бесәй менән клоун». Мультфильм.
18.25 Тамашасыларҙың һорауы буйынса. «Миллионды нисек урларға». Нәфис фильм. 1-се һәм 2-се сериялары.
20.30 Ваҡыт.

21.00 Телевизион тамашасы юлдашы.
21.15 «Йырлайыҡ, дуҫтар».
23.10 С. Лем. «Бутерброд». Телевизион спектакль. Премьера.

«ДУБЛЬ-4»

7.30 Иртәнге гимнастика.
7.45 «Тәүге рейс». Телевизион нәфис фильм.
9.00 Мультфильмдар.
9.15 «Челюскинсылар». Нәфис фильм (Субтитрҙар менән). 1-се серияһы.
10.20 Союздаш республикалар кинопублицистикаһы. «Беҙҙең тауышыбыҙҙы донъя ишетер». Телевизион документаль фильм.
11.10 «Беҙҙең менән эшлә, беҙҙең кеүек эшлә, беҙҙән яҡшыраҡ эшлә».
12.10 «Юрмала-90».
13.30 Документаль фильм.
14.00 Видеоканал. «Совет Россияһы».
16.30 «Экран — халыҡ таланттарына» Баймаҡ районы (башҡортса).
17.40 Башҡортостан (башҡортса һәм русса).
18.00 Ваҡыт.
18.30 Педагогика бөтәһе өсөн.
19.30 Тыныс йоҡо, кескәйҙәр!
19.45 Башҡорт телен өйрәнәбеҙ (ҡабатлау).
20.00 Профсоюз конференцияһы делегаттарына концерт.
21.50 Өлкәндәр өсөн мультфильм.
22.00 Иғландар.
22.10 «Джаз йондоҙҙары». Төнгө сеанс.
23.20 «Мөхәббәт тураһында баллада». Киноконцерт.
23.50 «Алтын йәнлектәр ябырылыуы». Нәфис фильм.

йәкшәмбе

11 ФЕВРАЛЬ

«ОРБИТА-4» — «ВОСТОК»

7.30 «Спорт бөтәһе өсөн».
7.45 «Спортлото» тиражы.
8.00 Ритмик гимнастика.
8.30 «Иртә таңдан». Балалар өсөн тапшырыу.
9.30 «Ватанға хеҙмәттә».
10.30 Иртәнге күңел асыу программаһы.
11.00 Сәйәхәтселәр клубы.
12.00 Музыкаль киоск.
12.30 Еңеүҙең 45 йыллығына ҡарата. Биш сериялы телевизион нәфис фильм. «Ваҡыт беҙҙе һайланы». 3-сө серияһы.
13.40 Сәләмәтлек.
15.15 Ауыл өсөн бер сәғәт.
16.15 «Йырҙы отоп ал». Өлкәндәр һәм балалар өсөн.
16.30 Балалар өсөн «Марафон-15» информацион-публицистик программаһы.
18.00 Ф. Ғаскаров исемендәге БАССР дәүләт халыҡ бейеүҙәре ансамбленә — 50 йыл.
19.25 Тамашасыларҙың һорауы буйынса. «Ҡаршы тороу». Биш сериялы телевизион нәфис фильм. 1-се серияһы.
20.30 «7 көн».
21.30 «Мәңгелек тураһында уйҙар». Йәкшәмбе вәғәзе.
21.45 Концерт.
22.40 «Уларҙы Юрмала асты». Музыкаль программа.

«ДУБЛЬ-4»

7.30 Зарядкаға баҫ!
7.45 «Ике айыу балаһы». Мультфильм.
8.00 «Мордасова йырлаған саҡта». Фильм-концерт.
8.40 Документаль фильм. «Имәнлек».
9.10 «Челюскинсылар». Нәфис фильм (субтитрҙар менән). 2-се серияһы.
10.15 «Контакт». Телевизион очерк.
11.00 Сәйәхәтселәр клубы.
12.00 А. Ғилажев. «Балаһын юғалтҡан болан эҙенән». Салауат дәүләт башҡорт драма театры спектакле (башҡортса).
14.30 Башҡорт телен өйрәнәбеҙ (ҡабатлау).
14.45 «Бәпембә — ҡояш ҡыҙы» (башҡортса).
15.10 Башҡортостан телевидениеһы программаһы.
16.05 Т. Шарипов йырҙары (башҡортса).
16.30 «Планета». Халыҡ-ара программа.
17.30 Киносерпантин. 1-се бүлеге.
19.30 Тыныс йоҡо, кескәйҙәр!
19.45 Киносерпантин. 2-се бүлеге.
20.30 «7 көн».
21.30 «Киносерпантин». 3-сө бүлеге. «Гангстерҙарҙың уйын ҡағиҙәләре башҡа». «Деррик» серияһынан нәфис фильм.

---

120 СӘҒӘТ

Нимә? Ҡайҙа? Ҡасан?

КҮП БЕЛЕҮСЕЛӘР — ГАЗЕТА УҠЫУСЫЛАР

Хөрмәтле күп белеүселәр, III тур тамамланды. Дөрөҫөн әйткәндә, телефондан шылтыратыуҙар һәм дөрөҫ яуаптар кәмей төштө. Денис Салов — 4, Гүзәл Фәйзуллина менән Александр Ткач өсәр һорауға дөрөҫ яуап ебәргән.

III ТУР ҺОРАУҘАРЫНА ЯУАПТАР:

1. Парабеллум — латинса «һуғышҡа әҙерлән» тигәнде аңлата.
2. «Платон минең дуҫым, ләкин хәҡиҡәт ҡәҙерлерәк».
3. Тутыйғош менән кальмарҙың суҡыштары оҡшаш.
4. «Ғилмияза» йырынан.
5. Спорт атына шыйыҡ азот менән яндырып тамға һалалар.

IV ТУР ҺОРАУҘАРЫ:

1. Борonғo Рустә «ус» һүҙе нимәне аңлатҡан?
2. Атты айырым ҡуя торған урын нисек атала?
3. Иҫкергән һүҙҙәр исемлегендә «закон ҡабул итеү» тигән һүҙҙәр бар. Был нимәне аңлата?
4. Рубикон аша сығыр алдынан сенаттың фекеренә ҡаршы Юлий Цезарь... тип ҡысҡырған. Ул нимә тигән?
5. Скульпторҙар ҙа хаталана. Салауат Юлаев һәйкәлендәге бер хатаны әйтегеҙ.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ: IV тур йомғаҡтары буйынса «Айҙың күп белеүсеһе» призы тапшырыласаҡ. Ғәҙәттәгесә һорауҙарға яуаптар шаршамбы көндәрендә сәғәт 4-тән киске 7-гә тиклем 23-36-91 һәм 22-83-84 телефондары аша ҡабул ителә.

Уңыш теләйбеҙ!

КҮП БЕЛЕҮСЕЛӘР КЛУБЫ.

Театр асылды

Өфөлә «Нур» тип аталған татар театр студияһы асылды.

Ғәлиәскәр Камалдың «Беҙҙең ҡаланың серҙәре» пьесаһы буйынса ҡуйылған спектаклде тамашасылар яратып ҡабул итә.

ҺҮРӘТТӘРҘӘ: Дауытбикә ролендә — Тәнзилә Хисамова; спектаклдән күренеш.

Р. МӨХӘМӘТОВ фотолары.

Рубриканы Ҡурай йәмғиәте президенты Әҙһәм Исҡужин алып бара

Тыныслыҡ илсеһе

Ҡурай һәм башҡорт халҡы тураһында халыҡ ижадында, яҙма әҙәбиәттә бик борондан замандарҙан алып мәғлүмәттәр бар.

«Ҡуңыр буға» эпосында «...Гөл сәскәһе нәҙек кенә бала тауышы менән телгә килде, ти. Йөрәк-бауырҙы өҙгөләрлек, тән тамырҙарын тетрәтерлек ҡурай тауышы ишетелде.... Шул моңға ҡушылып ҡаршылағы арҡа яғынан дер һелкетеп баҫҡан толҡ тауышы, Урал өҫтөндә алыҫ-алыҫтарға бығаса ишетелмәгән бер ауаз таралды», ти ҡурай тураһында легенда.

«Салауатҡай тартҡан ҡурайҡайҙың
Ике башҡынаһы ҡурғашлы...»
«Ҡаһым түрә фарман биргән саҡта
Уң ҡулында булды ҡурайы».
«Яҡшы атҡа менеп, еләп кейеп,
Йөрөһәң ине Урал буйлатып.
Кәрәгәләр алып, киң Уралда
Ултырһаң ине ҡурай уйнатып».

тип йырлаған халыҡ йырҙарҙа.

921 йылда башҡорт иленә килгән ғәрәп сәйәхәтсеһе Ибн-Фаҙлан Волга менән Тобол йылғалары араһында башҡорт халҡы йәшәүе һәм уларҙың ҡурайҙа «Сыҡрау торна»ны уйнауҙары тураһында яҙып ҡалдырған.

Тимофей Беляев «Ҡуҙый-Күрпәс» эпосын, ҡурайсынан яҙып алып, руссаға тәржемә итә[1]. А. М. Федоров «Ҡурайщик» хикәйәһен яҙа[2]. С. Г. Рыбаков бынан бер быуат элек Урал тауҙары буйлап, башҡорт халҡының йырҙарын, моңдарын яҙып, ҡурайсылар эҙләп йөрөй. Бөйөк шағир Шәйехзада Бабич бик ҡатмарлы һәм хәтәр замандарҙа, башҡорт халҡының уникаль тарихына бәйләп, «Ҡурайға» әҫәрен ижад итә, башҡорт халҡына дан йырлай.

Йомабай Иҫәнбаев, 52 ҡалала ҡурай уйнап, Европа халыҡтарының ихтирамын яулаһы. Ғата Сөләймәнов, Ишмулла Дилмөхәмәтов, Азат Айытҡоловтар, донъяның төрлө төбәктәрендә сығыш яһап, һәр тарафтағы халыҡтарҙың ихтирамын яуланылар һәм башҡорт халҡының музыкаль ҡоралы ҡурайҙың данын донъя халыҡтары араһында тараттылар.

Бөйөк Ватан һуғышында генерал Ватутин Ҡәҙерғолов Мөхәммәт ағайҙың ҡурайҙа уйнағанын яратҡан. Бер мәлдә фронт һыҙығында репродуктор аша ла уйнатҡан. Ҡурай моңо тынғанса, ике яҡтың да атышыуҙары туҡтап торған икән. Бөгөнгө көндә ул ҡурай Мәскәүҙә СССР Ҡораллы Көстәре музейында экспонат булып һаҡлана.

Ҡурай — башҡорт халҡының изге ҡоралы. Яуҙа яуҙаш булған, тормошта ҡайғыһын да, шатлығын да уртаҡлашҡан ул.

Ҡурай уйнарға, ғәҙәттә, ҡурай моңон, башҡорт халҡының йыр-моңдарын ысын күңелдән яратҡан кешеләр үҙҙәренең тырышлығы арҡаһында ғүмер буйы өйрәнгәндәр.

Ҡурай уйнарға өйрәнгәндән һуң, һеҙҙең тулы мәғәнәһендә ысын ҡурайсы булырға тырышырға кәрәк, ә ул анһат эш түгел. Бының өсөн башҡорт халҡының йырҙарының тарихын, уң һигеҙ томлыҡ ижадын өйрәнергә, башҡа халыҡтарҙың тарихына, йырҙарына, ижадына, ғөрөф-ғәҙәттәренә иғтибарлы, ихтирамлы, әхлаҡи тәрбиәле, культуралы булырға, һәр ваҡыт үҙ белемеңде арттырып күпте белергә тырышырға һәм, шул уҡ ваҡытта, «үҙеңдән башҡаны әүлиә, тип бел» тигәнде иҫеңдә тотоп, башҡорт халҡы вәкиле булараҡ, әҙәплелек менән изге юлда йөрөгәндә онотмаҫҡа тейешһең.

Шуларҙан сығып, бөгөн «Йәшлек» гәзитәһы үҙенең биттәрендә «Ҡурай дәресе» бирә башлай. Һәм ул даими алып барыласаҡ. Дәрестә актив булығыҙ, хөрмәтле уҡыусылар!

---

[1] Башкирия в русской литературе, 1961. т. 1.

[2] Башкирия в русской литературе, 1965. т. 3.

Очко бүлештеләр

Хоккей

«Салауат Юлаев» (Өфө) — «Кристалл» (Саратов) — 1:4, 1:0.

Юлаевсылар күсмә турнирҙың сираттағы уйындарын Саратовтың «Кристалл» командаһы менән үткәрҙе. Өфөләр тәүге матчта бик һүлпән уйнаны, ә ҡунаҡтар, киреһенсә, яҡшы уйын күрһәтеп, еңеүгә иреште. Иҫәп — 4:1.

Дәғүәселәрҙең икенсе уйыны бик көсөргәнешле үтте. Мөмкинлектәр байтаҡ булһа ла, ике осорҙа ла бер кем дә иҫәпте аса алманы.

Өсөнсө осор башланыу менән «Кристалл» спортсыларының ҡапҡаһына дәррәү һөжүм башланды. Һуңынан Рәшит Ғимаев Юрий Никоновҡа бик оҫта итеп пас бирә, ә теғеһе, мөмкинлектән файҙаланып, еңеүле шайбаны ҡапҡаға индерә.

Артабан ике команда ла ҙур тырышлыҡ һалыуға ҡарамаҫтан, иҫәп үҙгәрешһеҙ ҡалды һәм юлаевсылар 1:0 иҫәбе менән еңеү яуланы.

Дөрөҫөн әйткәндә, беҙҙең хоккейсыларҙың «Кристалл» менән уйыны Өфө көйәрмәндәренең күңелен төшөрҙө. Командаларҙың уйыны яҡшы тәьҫир ҡалдырманы.

Уртаса оҫталыҡ, һәлмәк тиҙлек, һөжүмдә аныҡ эш итмәү кеүек сифаттар командабыҙҙың йөҙөн биҙәмәй.

Һигеҙ уйында 70 очко йыйып, «Салауат Юлаев» әлегә — 6-сы урында. Өфө хоккейсылары сираттағы турнир уйындарын 10 һәм 11 февралдә үҙ боҙонда Силәбенең «Трактор» командаһы менән уҙғарасаҡ.

* * *

СКСЮ юниорҙары СССР ярым финалы беренселегенә сираттағы уйындарҙы Воскресенскиҙа «Химик» командаһы менән үткәрҙе һәм 0:6, 1:5 иҫәбенә отолдо.

Н. БАЙРАСОВ.

КРОССВОРД

ГОРИЗОНТАЛЬ БУЙЫНСА:

7. Хәреф йыйыу машинаһы. 8. Йәнлектәрҙең йәшәгән һәм уларҙы тамашасыларға күрһәтеү урыны. 9. Ҡош. 10. Йылғаның һай урыны. 11. Иң ҙур һыу. 14. Ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы. 15. Планета. 16. Башҡортостандағы район. 18. Свердловск өлкәһендәге ҡала. 23. Башҡорт шағиры (1895—1919). 25. Игендең өҫкө өлөшө. 26. Материкка ҙур һыу үтеп ингән урын. 27. Ҡош. 28. Үҫемлек.

ВЕРТИКАЛЬ БУЙЫНСА:

1. Сәскә. 2. Белоруссиялағы ҡала. 3. Медицина учреждениеһы. 4. Башҡорт халыҡ йыры. 5. Ағыулы газ. 6. Музыканттар коллективы. 12. Иң эҫе йәки һыуыҡ осор. 13. Ҡырҡыу әйбере. 17. Емеш ағасы. 19. Ир-ат исеме. 20. Йәштәрҙең һәм студенттарҙың XII Бөтә Донъя фестивале талисманы. 21. «Салауат Юлаев» операһына либретто яҙған автор. 22. Башҡортостандағы район. 24. Аш тәмләндергес.



Д. РАМАЗАНОВ төҙөнө.
Магнитогорск.

ГАЗЕТАБЫҘҘЫҢ 9-СЫ ҺАНЫНДА СЫҠҠАН «А» ЧАЙНВОРДЫНЫҢ ЯУАПТАРЫ:

1. Алҡа. 2. Ашхана. 3. Афиша. 4. Арена. 5. Аптека. 6. Арба. 7. Абдулла. 8. Аҡмулла. 9. Арпа. 10. Алма. 11. Аксиома. 12. Алабуға. 13. Алаша. 14. Алабута. 15. Аждаһа. 16. Ағуна. 17. Автомашина. 18. Авторучка. 19. Абаға. 20. Альфа. 21. Айва. 23. Акустика. 24. Анкета.

«Йәшлек»
ВЛКСМ-дың Башҡортостан Өлкә Комитеты органы

БЕҘҘЕҢ АДРЕС:
450079, Өфө, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13, 8-се ҡат.
Телефондар: 23-46-38, 22-56-45.

Газета шишәмбе, кесаҙна, шәмбе көндәрендә башҡорт телендә сыға.

Индексы — 50604.

Редакторы Б. НАЗАРҒОЛОВ.

КПСС-тың Башҡортостан Өлкә Комитеты нәшриәте типографияһы.

Заказ № 188.

П03202.